ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 март (буранай) 2017

№9 (739)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Милли ҫҙаң...**

ғаиләлә тәрбиәләнә



5

**Ҡатынға булмаймы ярап?**

Түбәндәге шарттарҙы үтәп ҡара, улайһа...



6-7

**Ҡупшылыҡты үҙ иткәндәр...**



матурлыҡ мәҙәниәтенә йөҙөн бора

8-9

**Шиғырҙарың илгә оран һала,**

Шиғырҙарың ҡора сымылдыҡ...



11,16

ТВ-программа 14

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 31 мартҡа тиклем 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә (индекс 50665) ваҡытынан алда арзаныраҡ хаҡҡа яҙылыу бара, йәғни был осорҙа баҫмабыҙға яҙылыу 469 һум 92 тин, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II төркөм инвалидтары өсөн 423 һум 96 тин тәшкил итә. Ә тәүге ярты йыллыҡта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 мартҡа тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлау мөмкинлегенә эйә (өс айға - 244 һум 70 тин).**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Байрам уңайынан йөрәк һүҙегеҙҙе белдерегеҙ әле: тормошоғоҙҙағы айырыуса йылы һүҙгә лайыҡ ҡатын-ҡыҙ кем?

***Мөхтәр МОНАСИПОВ, Баймаҡ районы Ярат ауылының "Атайсал" ҡоро етәксеһе:*** Мин бөгөн айырып ҡына бер кемде лә атамай, бөтөн ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға өндәшергә булдым, сөнки йылы һүҙгә, айырым иғтибарға бары тик улар лайыҡ, тип уйлайым. Көн яҡтыһы - ҡояш, төн гүзәллеге йондоҙ булған кеүек, йәшәүҙең дә йәме, нуры - ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙа. Мин һеҙҙең атыр таңдарға ҡыуанып, Аллаһыбыҙға рәхмәтле булып, гел йылмайып йәшәүегеҙҙе теләйем. Бөгөнгө көндә йылмайыуға, бәлки, сәбәптәр ҙә аҙыраҡтыр, тик шулай ҙа сәбәптәр эҙләп тормағыҙ, ә һеҙҙең йылмайыуҙан тыуыр ҡыуаныстар, бәрәкәт һәм именлек хаҡында уйлағыҙ ҙа, йылмайығыҙ - бары шул ғына, хатта ки был һеҙҙең өсөн еңел бирелмәгән хәлдә лә. Сөнки был донъяның хис-тойғо көйләнеше, эске бер тәртибе барыбер ҙә һеҙҙең кәйефкә, күңел торошоғоҙға бәйләнгән. Һеҙҙең йөҙ балҡыһа, йонсоу көн дә асыла, эштәребеҙ ҙә йәйлана, күңелдәребеҙ ҙә күтәрелә. Дәүерҙәр ниндәйгә генә төрләнеп тормаһын, ҡатын-ҡыҙ барыбер үҙенең төп асылына, тәғәйенләнешенә тоғро ҡалып, ғаилә ҡояшы, донъя йәме булып йәшәүен дауам итһен ине. Байрам көндәрендә гүзәлдәрҙән-гүзәлдәребеҙгә еткерер теләгем бына шул ине.

***Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, шағир, яҙыусы, журналист:*** Ул ҡатын-ҡыҙ, әлбиттә, минең әсәйем Мәрйәм Хәйбулла ҡыҙы. Күптән инде баҡыйлыҡҡа күсһә лә, ул әле лә минең яҙмышымдағы мөһим ваҡиғаларҙа ҡатнаша һымаҡ. Әсәйем беҙҙе, ун бер баланы яралтып, бәпләп кенә үҫтерҙе, уҡытып, әҙәм итеп, оло донъяға аяҡ баҫтырҙы. Уның имза ҡуйырлыҡтан артыҡ белеме лә булманы, әммә үтә аҡыллы, аңлы, йәшәйешкә фәлсәфәүи ҡарашлы булды. Бөгөнгө ҡараштан, ун бер баланы көтөү - ул башҡа һыймаҫлыҡ хәл кеүек. Хәтеремдә, беҙ хатта бер мәл иртәнсәк мәктәпкә һигеҙ бала сығып китә инек. Иң өлкән апайым унынсыла, бәләкәйебеҙ беренселә уҡыған йыл. Дүртәүебеҙ ауыл мәктәбенә, дүрт олорағы күрше ауылға юллана. Ул ваҡытта электр уты юҡ, аш төрлөлөгө лә самалы. Әсәйебеҙ таң һыҙылмаҫ элек тороп, өйҙө йылыта, бер ҡаҙан картуф бешерә лә, яйлап ҡына бер-бер артлы балаларын уята башлай. Алыҫҡараҡ атлаусыларҙы алдараҡ, бәләкәйерәктәрҙе яҡҡыра биреп торғоҙа. Дәрестән ҡайтыуға иртәнсәкке картуф һары майҙа ҡыҙҙырылған була, кискә иһә ауыл ғәҙәтенсә - аш. Бына ошо ғәмәлдәрҙе ул ғүмер буйына туҡтауһыҙ ҡабатланы һәм ошо күренештәр минең күңелемә ҡәҙерле бер картина булып һеңеп ҡалған.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БАЙРАМ МЕНӘН!*

## ҠАТЫН-ҠЫҘҒА МӘҘХИӘ

*Һай, ҡатын-ҡыҙ, ҡатын-ҡыҙ -*
*Йөрәктәрҙә баҙлар ҡуҙ,*
*Табайым һуң ҡайҙан һүҙ -*
*Һеҙҙе маҡтар матур һүҙ,*
*Һеҙҙе данлап йырлар һүҙ,*
*Ил алдында ҙурлар һүҙ.*
*Вай, ҡатын-ҡыҙ, ҡатын-ҡыҙ -*
*Бәпәй саҡта бәпкә-ҡыҙ,*
*Балдай татлы наҙлы ҡыҙ,*
*Буй еткәстен - аҡҡош-ҡыҙ,*
*Нескә билле миләш-ҡыҙ -*
*Егеттәргә кәләш-ҡыҙ.*
*Эй, ҡатын-ҡыҙ, ҡатын-ҡыҙ -*
*Тул йыйынаһын буйығыҙ -*
*Бәпестә булһын уйығыҙ,*
*Алтын улдар тыуҙырып,*
*Гүзәл ҡыҙҙар үҫтереп,*
*Ил инәһе булығыҙ!*

**Вәли БӘҘРИ.**



"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# КӘҢӘШСЕ ЛӘ, РУХТАШ ТА...

**Уҡыу культы беҙҙең ғаиләлә әсәйемдән киләләр, күрәһең. Ябай ауыл ҡатыны, 8 бала әсәһе булыуға ҡарамаҫтан, ул гел матбуғатҡа яҙыла торғайны. Өйөбөҙҙә заманында хатта "Роман-газета" ла булды. Һуңыраҡ, хаҡтар ҡиммәтләнеп, алдырыу мөмкинлеге булмағас, юл аша йәшәгән Шамил күршеләрҙән алып тороп, шунда донъя күргән романдарҙы уҡый ине. Хатта вафат булғас та, бер ваҡыт түшәмдә уны өй башынан ҡултыҡ аҫтына шул "Роман-газета"ларын ҡыҫтырып, тау шыуған кеүек шыуып килеп төштө икән, тип күрәм.**

Бынан 10 йылдар элек, быҒаса яҙылған матбуғат сараһынан ялҡып, аптырап, ниндәй баҫмаға яҙылырға белмәй йөрөгәндә, "Киске Өфө"гә яҙылып ҡарарға ҡарар иттем һәм... үҙем дә һиҙмәҫтән, уға ғашиҡ булыуымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Ысын мәғәнәһендә дуҫ, иптәш, тиңдәш, кәңәшсе һәм терәк кеүек ул миңә. Хәҙер инде уны барлыҡ туғандарыма әйтеп яҙҙыртып, уларҙы ла гәзит менән дуҫлаштырып бөттөм. Ошо йылдар дауамында һәр һанын йыйып барам, уларҙы мансардала һаҡлайым, берәй һорауға яуап тапмаған ваҡыттарҙа тупланмаларҙы алып төшөп, ҡарап-ҡарап торам. Бигерәк тә мине тарихи мәҡәләләр хайран итә, хатта ҡайһы берҙәрен уҡып, күҙҙәргә йәш төйөлә, ултырып илап та алам. Сәләмәтлек тураһындағы мәҡәләләрҙе, бигерәк тә күңегеүҙәр булғандарын, яратам, уларҙы үҙем дә эшләйем, туғандарымды ла физкультураға баҫтырып бөттөм.

Кем нисектер, әммә мин гәзитте һуңғы битенән башлап уҡыйым. Иң тәүҙә "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһы менән танышам, шунан сәләмәтлек темаһына күсәм, урта биттәрҙе ентекләп уҡып сыҡҡас, тарихты барларға тотонам. Таныштар менән аралашҡанда гәзиттән уҡығандарымды һөйләп ебәрһәм, уны ҡайҙан беләһең, тип аптырайҙар. "Гәзит алдырмайһығыҙмы ни?" тип, мин уларға аптырайым. Сәләмәтлек тураһында һүҙ сыҡһынмы, башҡа темамы, хатта ҡунаҡта кемдәлер тәбриклəп һүҙ әйтергә, теләктәр теләргә тура килгәндә лә гәзит ярҙамға килә.

Башҡорт булып, милли матбуғатҡа ла яҙылмаһаң, ояты ни тора? Шуға ла мин "Киске Өфө"нән башҡа тағы "Башҡортостан-Йома"ны алдырам. Ундағы мәҡәләләр ҙә күңелгә ятышлы ғына. "Башҡортостан ҡыҙы" журналына яҙылмай ҡалғаным юҡ. 1-се синыфта уҡыған ейәнсәрем "Аҡбуҙат" журналын көтөп ала.

35 йыл инде Өфө районының Иҫке Жуков ауылында йәшәйбеҙ. Хәҙер беҙҙең эргәлә Яңы Жуков ауылы тәҙәлдә. Унда башҡорттар, йәштәр күп. Әле "Карлуғас" балалар баҡсаһында башҡорт төркөмдәре эшләй. Өфө районында йәшәүсе милләттәштәребеҙҙә лә гәзит уҡыуға ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу өсөн беҙҙең яҡтарҙы ла яҡтыртһығыҙ, шәп булыр ине.

Флүзә МИНҺАЖЕВА.
Өфө районы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Байрам уңайынан йөрәк һүҙегеҙҙе белдерегеҙ әле: тормошоғоҙҙағы айырыуса йылы һүҙгә лайыҡ ҡатын-ҡыҙ кем?

(Башы 1-се биттә).

Балалар күп булып, ауыл ябайлығында ғына көн итһәк тә, әсәйем шундай донъясыл булғандыр, күрәһең, тип уйлайым. Ул аҙыҡ-түлеккә, көнкүреш кәрәк-яраҡтарына үтә лә һаҡсыл булды. Ауылдаштарыбыҙ нимәлер кәрәк булғанда "Мәрйәмдә була торған" тип уға килде. Атайыбыҙ ҙа һәр ваҡыт уның ризалығын, фатихаһын алып ҡына эшләп өйрәнгәйне, шуныһыҙ эше килеп сыҡмай ҙа ҡуя торғайны. Сөнки әсәйебеҙ ни ғиллә менәндер барыһын да ҡуҙаллай, тоҫмаллай белде. Был уның тәбиғи һиҙгерлегенән, йәшәйештә, кешеләрҙе шул ҡәҙәр яҡшы төшөнөүенән булғандыр инде. Уның ошо алдағыһын уйлап, һәр нәмәне үҙенең контроле аҫтында тотоп, ҡайғыртып, ҡурсалап йәшәй белеүе шул ҡәҙәрем булғандыр, тием, хатта үҙе баҡыйлыҡҡа күскәндә лә атайым янында үҙ урынын биләр кешене үҙе һайлап китте. Был уның атайымды һәм балаларының ойошоп йәшәүен хәстәрләүе ине һаман. Үҙенең ҡырҡы булаһы көндә атайыма никахланырға әйтте. Йәғни, аңлауыбыҙса, кешенең йәне ҡырҡы тулған көндө бөтөн был донъялыҡ иҫтәлектәренән азат булып осоп китә. Һәм әсәйебеҙ бына ошоларҙы белеп, күреп, тынысланып китергә уйлағандыр ҙа, тимен. Бына шундай булды ул минең әсәйем һәм әле янымда булмаһа ла, мин уның барлығын, мине ҡурсалап, аяп тороуын тойоп йәшәйем. Ул минең йөрәгем түрендә.

Байрам уңайынан һәр ҡатын-ҡыҙға бына шундай әсәй булыу бәхетенә өлгәшергә һәм балалары өсөн алыштырғыһыҙ изге зат булып йәшәй белеү аҡылын теләйем. Ә балалар әсәйҙәрен ҡәҙерләһен һәм һаҡлаһын.

*Рәүеф БИКТАШЕВ, педагогика ветераны, Сибай ҡалаһы:* Иң матур, яҡты, күңелгә яҡын байрам бит ул Ҡатын-ҡыҙҙар көнө. Шул уңайҙан файҙаланып ҡалыу мөмкинлегенә бик шатмын, рәхмәт "Киске Өфө"гә! Үҙемдә ғүмер буйы сәскәләр гөлләмәһе араһында хис итеп йәшәйем, шөкөр. Шуның менән дә бик бәхетлемен: ҡатыным, күҙ нурҙарым кеүек күргән өс ҡыҙым, ейәнсәрҙәрем минең өсөн иң ҡәҙерле кешеләрем һәм йөрәк түремдән сыҡҡан һүҙҙәремә лә фәҡәт улар лайыҡ. Тормош юлдашым - мәғариф отличнигы Әминә Әхмәтвәли ҡыҙы менән ярты быуаттан ашыу татыу ғүмер итәбеҙ. Ғаиләбеҙ ныҡлығына тормош маҡсаттарыбыҙҙың уртаҡлығы булышлыҡ иткәндер, тием: икебеҙ ҙә оҙаҡ йылдар балалар уҡыттыҡ. Уҡыусыларыбыҙ араһында кемдәр генә юҡ хәҙер! Онотмайҙар, күрешеп, хәл белешеп китәләр, шылтыраталар. Үҙ балаларыбыҙ ҙа лайыҡлы кешеләр, ихтирамға лайыҡ һөнәр эйәләре булып үҫтеләр. Ҡатыным ижадҡа мөкиббән кеше, уны һәүәҫкәр композитор булараҡ та беләләр. Уның йырҙарын Миңзәлә Түләбаева бик матур итеп башҡара.

Байрам уңайынан, тигәс, ҡыҙҙарымды ла телгә алып үтәйем. Өлкән ҡыҙым Зәмәрә - тәжрибәле юрист, Өфөлә оҙаҡ йылдар нотариус булып эшләй. Уларҙың ҡыҙы - ейәнсәребеҙ Гүзәл шулай уҡ атаһы менән әсәһе кеүек, юрист һөнәрен һайланы, әле Ҡазан юридик академияһы аспиранты, БДУ-ла уҡыта, юридик фәндәр кандидаты. Уртансы ҡыҙым Миңзәлә БР Адвокаттар коллегияһының Сибай филиалы етәксеһе. Тәүге һөнәре буйынса медицина хеҙмәткәре ине, шулай ҙа, ике балаһы булыуға ла ҡарамаҫтан, тырышып, апаһы менән еҙнәһенә эйәреп, юридик факультетты тамамланы. Ике ҡыҙы - ейәнсәрҙәрем Әлиә менән Зөлфиә шулай уҡ юристар. Ә бына кесе ҡыҙым Мәрйәм минең һөнәрҙе үҙ итте: университет бөтөрөп, хәҙер күп йылдар Сибай педколледжында математиканан уҡыта. Ҡыҙы - ейәнсәрем Ленара әле 6-сы класта уҡый. Ошо кендәрҙә ейәнем Денис менән киленебеҙ беҙгә бүләсәр бүләк итте, Камилә тип исем ҡуштылар. Бик шатландыҡ. Ҡыҙ бала тыуһа, ергә именлек килер, тигән боронғолар, шулай була күрһен. Йәнәшәмдәге ошо матурҙарымды, уңғандарымды яҙ байрамы менән ихлас ҡотлайым. Һеҙҙең эскерһеҙ һөйөү тойғоларығыҙҙа төрөнөп, даими хәстәрлектәрегеҙҙә тойоп йәшәйем - минең өсөн шунан да ҙурыраҡ бәхет юҡ, рәхмәт һеҙгә, ҡәҙерләләрем! Үҙегеҙгә лә бәхетле ғүмер кисереп, был донъяның ҡәҙер-хөрмәттәрен күреп, оҙон-оҙаҡ йәшәргә насип итһен, тип теләйем.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# "БЕЛМӘЙЕМ... ҠЫҪЫЛМАЙЫМ..."



**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы 50-се һанында Лена Абдрахманованың "Кинәйә" рубрикаһында баҫылған "Аҡыллы малай" исемле мәҡәләһен уҡығандан һуң, рәхәтләнеп бер көлөп алдым. "Аҡыллы малай" тап минең 2-се синыфта уҡыусы ейәнсәрем кеүек яуап бирә: "Белмәйем... Ҡыҫылмайым..." Тап ошо XXI быуат үҫмерҙәре инде былар.**

Мостай Кәримдең бер хәтирәһе иҫтә ҡалған: "Беҙҙе, йәш шағирҙарҙы, Яҙыусылар союзына ҡабул итеү көнө. Ҡабул иттеләр ҙә, оло йәштәге яҙыусылар беҙҙе ҡурсалар өсөн үҙ-ара бүлешеп алдылар..." Бынан бер нисә йыл элек Мәскәүҙә уҡып, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә ҡайтҡан йәш артистар ҙа ошо лайыраҡ итеп белдергәйне: "Оло йәштәге, танылған артистар беҙҙе үҙ балалары кеүек итеп, ихлас, йылы ҡабул иттеләр, ҡурсалап, ярҙам итеп, артабан үҫтерҙеләр..."

Һуңғы бер нисә йыл эсендә генә донъябыҙҙың "ҡыҫылмау" ягына тәгәрәүен күҙәтә башланыҡ. Һәр тарафта тарҡаулыҡ хөкөм һөрә. Хөкүмәт - айырым, халыҡ - айырым. Байҙар - бер яҡта, ярлылар - бер яҡта. Ололар - бер башҡа, йәштәр - үҙенә башҡа. "Ҡыҫылмайым... Белмәйем..." заманының һөҙөмтәләре инде былар. Тарҡаулыҡты фашлап, берҙәмлеккә ынтылһаҡ, бәлки, милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалыуға ҙур өлөш индерер инек, тип уйланыла. Һәр хәлдә, ҡыҫылмай йәшәүгә ҡаршы булып, бер-беребеҙҙең хәлен белешеп, ҡулыбыҙҙан килгәнсе ярҙам итешеп йәшәргә саҡырыр инем. Хоҙайыбыҙ насип итеп, йәш быуынға аҡыл бирһә, улар ҙа илһөйәр, телһөйәр булып үҫер. "Белмәйем... Ҡыҫылмайым..." тип аталған хистәр булмаҫ уларҙа, тип ышанғы килә.

Айгөл АХУНОВА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы "Сочи-2017" Рәсәй инвестиция форумында ҡатнашты. Рөстәм Зәки улы билдәләүенсә, Хөкүмәтебеҙ бер нисә инвестиция килешеүенә ҡул ҡуйған. Айырыуса мөһим документтар араһынан ВТБ банкының автомобиль юлын төҙөү менән бәйле концессия килешеүен финанслау хаҡындағы меморандумы ла бар. Һүҙ автомобиль юлы тоннеле төҙөлөшөн тамамлау, Ҡариҙел йылғаһы аша күпер төҙөү, Өфө арьяғынан М5 федераль трассаһына сығыу хаҡында бара.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың бойороғо менән Илгиз Ҡыҙырғолов БР Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ректоры итеп тәғәйенләнде. Ҡыҙырғолов Илгиз Раян улы 1976 йылдың 4 ноябрендә Ишембай районының Байгуҙа ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Физика-математика фәндәре докторы.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проектына индерелгән. Төҙөкләндереүгә аҡса төбәк ҡаҙнаһынан берлектә финанслау шарттарында федераль бюджеттан бүленә. Өфөлә өҫтөнлөклө федераль проект сиктәрендә "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркы, Максим Рыльский урамы һәм Ҡариҙел йылғаһының яры төҙөкләндерелә. "Ҡашҡаҙан" паркы 2018 йылда Рәсәйҙә үтәсәк футбол буйынса донъя чемпионатының фанаттар зонаһының береһе булараҡ ҡарала.

✓"Газпром" алдағы йылдарҙа рәсәйҙәр өсөн газға хаҡтарҙың 3-3,5 процентҡа артыуын ҡуҙаллай, тип хәбәр итә "Известия" гәзите. "Беҙ газға хаҡтарҙы көйләү процесы урта сроклы осорға ҡалыр тип ҡуҙаллайбыҙ. Арттырыу тәртибе инфляция кимәленә ҡарағанда түбәнерәк булыр, тип уйлайым. Көтөлгән дәүмәл 3-3,5 процент самаһы тәшкил итә", - тип хәбәр итте компания идараһы рәйесе урынбаҫары Андрей Круглов.

✓1992 йылда Өфө ҡала Советы депутаттары һәләтле йәштәрҙе дәртләндереү маҡсатында Аксаков премияһын булдыра. Йыл һайын бәйгелә гуманитар һәм техник уҡыу йорттары студенттары ҡатнаша. Әле премияға дәүгә итеүселәр эштәрен ҡабул итеү башланды. Эштәр С.Т.Аксаковтың мемориаль йорт-музейында 1 сентябргә тиклем ҡабул ителә. Адресы: З. Рәсүлев урамы, 4.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

**"Ир ҡайғыһы - итәктә, бала ҡайғыһы - йөрәктә" ти халыҡ мәҡәле. Бик тапҡыр, тәрән мәғәнәле, шул уҡ ваҡытта бер ниндәй ҙә аңлатма, тәфсир талап ителмәгән тетрәндерерлек һүҙҙәр. Был мәҡәл-әйтем, моғайын, ҡапыл ғына, көтмәгәндә бер кеше тарафынан ғына уйланып әйтелмәгәндер, тыумағандыр, ул быуаттар, дәүерҙәр һуҙымында яҙмыштар, бәғерҙәр һынауы һәм кисереше аша һыҡрап, әсе хәҡиҡәт булып яралғандыр. Әммә хәҙерге заман күҙлегенән сығып ҡарағанда, йәғни "итәк" һүҙенең туранан-тура мәғәнәһенә тапҡырлағанда, үкенескә ҡаршы, ҡыҙ-ҡатындарҙың "итәклеләре" күҙгә күренеп кәмей, уларҙың урынын "салбарлылары" яулай барыуы төрлөсә уйларға мәжбүр итә. Һүҙем - нәфис заттар беҙҙең өҫтән һалдырып алған салбар хаҡында. Юҡ, салбар бында һылтау ғына, мине борсоған мәсьәлә бөтөнләй башҡа нәмә тураһында...**

# ИР ҠАЙҒЫҺЫ ИТӘКТӘМЕ?

## Тик салбарҙың итәге юҡ бит әле, ҡыҙҙар!



### Тишә ҡарау...

Иң тәүҙә нәфис заттарыбыҙҙың салбар кейеп йөрөү мәсьәләһенә ир-аттар күҙлегенән ҡарайыҡ, баһа бирәйек. Кейһендәр әйҙә, килешә бит, былай-алаймы! Салбар йәл түгел, хәҙер бит салбарҙарҙы ҡыҙ-ҡатындар өсөн махсус рәүештә тегәләр. Әммә етди дәғүәбеҙҙе салбарыбыҙҙы йәлләгән өсөн дә белдермәйбеҙ, хөрмәтле ҡыҙ-ҡатындар! Етмәһә, ҡыҙ-ҡатын салбар кейһә... эһем... дөрөҫ, нәҡ өҫтөнә баҫтығыҙ, егеттәр: уларҙың тәндәренең иң һығылмалы, иң нәзәкәтле, иң ымһындырғыс урындары беленә башлай бит. Уғата яратабыҙ салбар кейеп йөрөгән ҡыҙ-ҡатынды. "Тс" итеп тел шартлатып та алабыҙ.

Хәҙер инде ҡыҙ-ҡатындың ни өсөн ҡырғындай ҡырылып салбар кейә башлау сәбәптәренә туҡталайыҡ. Күп кенә нәфис зат менән һөйләшкәндән һуң, ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшкәндән һуң, шундай һығымталарға килдем:

- ҡыҙ-ҡатын салбарҙы йылы һәм уңайлы булғаны өсөн кейә;
- күп кенә ҡыҙ-ҡатын, салбар элек-электән нәфис заттың кейем-һалымы булған, тип иҫбатлай;
- нәфис зат был кейемде ирҙәргә оҡшар өсөн ирекһеҙҙән көнөнән кейә;
- салбарҙы "ата" феминисткалар кейә;
- хеҙмәт һәм юл йөрөү шарттары ҡыҙ-ҡатындан салбар кейеүҙе талап итә (итәк, күлдәк уңайлы түгел);
- салбар кейеү аҙ сығым талап итә;
- салбар кейгән ҡыҙ-ҡатындың ҡайны берҙәре ялҡаулығын шулай йәшерә;
- ҡайны бер ҡыҙ-ҡатын эске кәмселектәрен тышҡы "эффект" менән тулыландырырға тырыша һ.б.

Әммә (быныһын инде нәфис заттарға сер итеп кенә әйтәм) ир-аттың урамда осраҡҡан һәр ҡыҙ-ҡатынды сисендерерлек итеп тишә ҡарау ғәҙәте лә бар. Был осраҡта салбар кейгән ҡыҙ-ҡатын ир-аттың ҡорбаны һанала. Ир-ат нәфис заттың иң тәүҙә йөҙөнә түгел, биленән аҫ яғына ҡарай, шунан һуң ғына ҡарашын өҫкө күсерә. Әгәр ҙә нәфис зат салбар кейгән булһа, ҡараш аҫ яҡта озаҡҡараҡ тотҡарлана һәм ул үҙенән-үҙе хыялында ғына тегене сисендерергә керешә. Йәғни, тишә ҡарай. Миңә лә ныҡ оҡшай салбар кейгән ҡыҙ-ҡатын, әммә бөтә мәсьәлә ана шул "тишә ҡарау"ҙа шул.

### Тамшаныу

Пәрәнжә менән бөркәнсекте Ислам дине ҡыҙ-ҡатындың азатлығын сикләр өсөн уйлап сығармаған. Шул уҡ ваҡытта нәфис зат бындай япмалар менән йөҙөн һәм башын ғына түгел, тәненең бар өлөшөн ҡаплап йөрөй. Хәҙер инде пәрәнжә ябынған ҡыҙ-ҡатын менән салбар кейгән яланғашын сағыштырып ҡарайыҡ. Пәрәнжәләнен урамда осраҡҡан ир-ат, уның йөҙөн һәм тән бөгөлөштәрен күреүҙән мәхрүм булғас, бер нисек тә үҙенең тамшаныу тип аталған хыял донъяһына алып инә алмаясаҡ. Ә инде бер сәғәткә генә ҡала урамына сыҡҡан салбарлыһы йөҙәрләгән, меңәрләгән ир-аттың сисендерерлек итеп тишә ҡарауына, тамшаныуына һәм һеләгәйе ағыуына дусар буласаҡ. Улай ғына түгел, ундай ҡыҙ күптән инде өйөнә инеп китһә лә, көн үтһә лә, төн етһә лә, һаман да йөҙәрләгән-меңәрләгән көслө заттың хыял донъяһында хур ҡыҙы булып йөрөйәсәк. Хыялды ысынбарлыҡҡа күсереп, күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: салбар кейгән нәфис һынлы бер ҡыҙ аждаһалай ғифриттәрҙең ҡосағынан-ҡосағына осоп йөрөй. Уларҙың һәр береһе ҡыҙҙы үҙенеке итергә теләй, тарткылаша, уҫмаҡлаша, бер-берененең йәнен ҡыя. Ярай әле, Аллаһы Тәғәлә беҙгә күп кенә әйберҙәрҙе һәм күренештәрҙе күреү һәләтенән мәхрүм иткән. Ә бит урамда нәфис затҡа ҡарап тамшанған ир-аттарҙың хыял донъяһын нисек бар, шулай күҙ алдына баҫтырһаң, экранда сағылдырһаң, тап ошолай һынланасаҡ был күренеш. Тимәк, быларҙан сығып, шундай һығымта яһарға була: салбар кейеп урамға сыҡҡан нәфис зат, үҙе лә һиҙмәҫтән, ир-ат күңелендә уҫаллыҡ, көндәшлек, яһиллыҡ тойғолары уятыуға һәләтле. Тимәк, донъяла ир-аттың бер-берененең йәнен ҡыйыуға, ҡанын ҡойоуға тиклем алып килеп еткергән дошманлыҡ хистәрендә ҡыҙ-ҡатындың салбар кейеү сәбәбе лә барҙыр.

Юҡты һөйләйһең, үҙенең нәфислеген тәненең тышына сығарып, урамдан үтеүсе ҡыҙ-ҡатын ир-ат күңелендә матурлыҡҡа һоҡланыу, мөхәббәт хистәре уята, тип әйтеүселәр ҙә булыр. Дөрөҫ, әммә шул ул һоҡланыу ҙа, тамшаныу кеүек, ғәжәйеп кире сифаттарға эйә.

### Күҙ тейеү

Халыҡта "күҙ тейеү" тигән төшөнсә бар. Бигерәк тә сабыйҙарҙы бындай тәьҫирҙән ҡурсыйҙар. Эзотерик медицина күҙ тейеүҙе "һоҡланыу энергияһы"на бәйләп аңлата. Йәғни нимәгәләр, кемгәләр хайран ҡалып һоҡланған саҡта кеше күҙендә һәр төрлө ауаларҙы ҡыйратырлыҡ энергия шәлкеме барлыҡҡа килә, һоҡланыу объектының биополеһын, йәғни ҡуҙыһын тишеп үтә. Артабан барлыҡҡа килгән өңөшлөктән кешенең аураһына кире зарядлы энергия тула ла, ул ауырый башлай. Хәҙер инде тәненең барлыҡ ымһындырғыс өлөштәрен белендереп, салбар кейгән нәфис затҡа тамшанаулы төбәлгән йөҙәрләгән-меңәрләгән ҡараштарҙың ниндәй афәт алып килгәнен күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ. Ҡыҙ-ҡатын шуны яҡшы аңлаһын: һәр бер ир-ат иң тәүҙә уның тәненең салбар ҡаплап торған өлөштәренә ҡараясаҡ. Меңәрләгән тамшаныулы ҡараштар (ә ҡараштарҙың ниндәйҙәре генә юҡ!) төбәлгән ерҙәргә ниндәй сирҙәр йоғорон күҙ алдына килтереүе генә ҡыйын. Һәр хәлдә, ҡыҙ-ҡатындың биле, бауыры, бөйөрө ауыртыуын, артыҡ йыуаная башлауын, иртә ҡартайыуын нәҡ салбар кейеп йөрөүгә бәйләп аңлаталар ҙа инде.

Малай саҡта урман-дала гиҙеп ҡайтһам, салбарыма ҡаҙалған меңәрләгән ата ҡылғандарҙы, бөргәктәрҙе, дегәнәктәрҙе сүпләп, күҙ тона торғайны. Уларҙы сүпләп бөтөрә алмайынса, йылы һыуға тығып, ебетеп төшөрөп, салбарымды саҡ әҙәм күрерлек хәлгә еткерә инем.

Хөрмәтле нәфис зат! Һеҙҙең дә салбарығыҙға меңәрләгән-меңәрләгән тамшаныу, һоҡланыу кеүек нәфселе һәм һеләгәйле ҡараш уҡтары ҡаҙалған. Улар ата ҡылған, бөргәк йә дегәнәк ише генә түгел һәм уларҙы бер ниндәй йыуыу, таҙартыу ысулы менән йолҡоп ташлап булмай. Хатта салбарығыҙҙы яндырған, көлгә ҡалдырған хәлдә лә юҡҡа сыҡмай ул уҡтар. Сөнки улар һеҙҙең һаулығығыҙға, булмышығыҙға, нәфислегегеҙгә, гүзәллегегеҙгә ҡаҙалған көнсөллөк уҡтары ла. Әгәр ҙә салбар кейеү һеҙгә оҡшай, уңайлы, һыуыҡтан һаҡлай икән, кейегеҙ, тик уның өҫтөнән оҙон итәкле кейем кейергә генә онотмағыҙ. Ҡыҙ-ҡатын итәкле кейем кейергә тейеш, был тәбиғәт ҡануны һәм уны мин уйлап сығарманым. Шулай уҡ мосолман динендә пәрәнжә, бөркәнсек ябынып йөрөү кеүек мотлаҡан ғәмәлдәр ҙә юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән.

**Хөрмәт ИБРАҺИМОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Еңеү ирекмәндәре" Бөтә Рәсәй йәмәғәт хәрәкәте "Еңеү илселәре" Бөтә Рәсәй конкурсы иғлан итте. 9 майҙа илебеҙҙең төрлө мөйөштәренән иң яҡшы 200 ирекмән Мәскәүҙә һәм Севастополдә илдең төп парадын ойоштороуҙа ҡатнаша. Сараларҙа ҡатнашыу өсөн волонтерыпобеды.рф сайтында теркәү үтергә һәм ғариза ҡалдырырға кәрәк.

✓Март айында Өфөлә ауыл хужалығы йәрминкәләре шәмбе көндәрендә генә уҙғарыла. Ленин районында сауҙа - Затон биҫтәһендәге "Тулҡын" скверы алдында, Орджоникидзе районында Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайы алдында уҙа. Октябрь районында ауыл хужалығы йәрминкәләре Спорт һарайы алдында һәм Рыльский урамындағы аллеяла ойошторола. Февраль айында йәрминкәләрҙә республиканың 32 районынан ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәр ҡатнашҡан. Һатылған продукцияның күләме 39,197 миллион һумдан ашҡан.

✓12 мартҡа тиклем Өфөлә Халыҡ-ара шашка буйынса донъя кубогының финалы үтә. Кубокта ҡатнашҡан 20 уйынсының һигеҙе Рәсәй исеменән сығыш яһай, шуларҙың алтауһы - Башҡортостан вәкилдәре. Улар - Тамара Танһыҡҡужина, Айгөл Иҙрисова, Әлиә Әминева, Александр Георгиев, Муродулло Амриллаев, Айнур Шәйбәков. Ярыштар "Президент Отель"дә уҙа (Аврора урамы, 2).

✓Өфөлә Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһында "Зәйнәб Биишеваның тормошо һәм ижады" IV республика ижади проекттар конкурсы ойошторолдо. Унда Өфө, Салауат, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Нефтекама, Белорет, Сибай ҡалаларынан, төрлө райондарҙан конкурсанттар сығыш яһаны.

✓Төбәктә Башҡортостан һәм Ҡытай провинцияларының юғары уҡыу йорттары араһында хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса эш дауам итә. Башҡорт дәүләт медицина университеты 2015 йылдан Наньчан, Аньхой, Сычуань университеттары һәм Цзянси провинцияһының традицион Ҡытай медицинаһы университеты менән хеҙмәттәшлек хаҡында килешеүҙәр төҙөнө. Ошо килешеүҙәр сиктәрендә студенттар һәм уҡытыусылар менән алмашыу, фәнни конференциялар ойошторола.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА

# ВЛАСТЫҢ ҠАТЫН-ҠЫҘ ЙӨҘӨ

✓ **Өфөлә яҙ сағыу һәм ҡыҙыҡлы проект-тан - ВДНХ-ЭКСПО комплексындағы "Властың ҡатын-ҡыҙ йөҙө" исемле фотокүргәҙмәнән башланды.** Күргәҙмәлә 15 сәйәсмән ҡатын-ҡыҙҙың портреты урын алған. "Күргәҙмәне әҙерләгәндә героиняларҙың донъяһына сумдым һәм уларҙың ни тиклем дәүләт эше менән мәшғүл булыуҙарын аңланым. Уларҙың бәләкәй генә ҡатын-ҡыҙ шатлыҡтарына ла ваҡыттары юҡ. Күптәре ошондай проектта беренсе тапҡыр ҡатнашты", - ти проекты ойоштороусы Башҡортостан күргәҙмәләр компанияһының рәссамы Ләйсән Мортазина. Фотопроект йыл дауамында бара. Һуңынан "Республиканың 100 ҡатын-ҡыҙы: көс һәм наҙлылыҡ" тигән ҡатын-ҡыҙ образдары галереяһын булдырыу ҡаралған.

✓ **Башҡортостанда тыуымды арттырыу өсөн ауылда акушерлыҡты үҫтерергә кәрәк, тип иҫәпләй "Башҡортостан Республикаһы. Яңы быуын" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Илдар Зәйнуллин.** "Ауылдарҙа акушерлыҡ пункттарының нимә икәнен онота башланылар, ҡатын-ҡыҙҙар бала табыу өсөн ҡалаларға китергә тырыша. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы бала табыуға әҙерләнергә өйрәтергә кәрәк", - тип билдәләне белгес демография мәсьәләһен хәл итеүгә арналған Башҡортостан Республикаһы Йәмәғәт палатаһы кәңәшмәһендә. Демография мәсьәләһен хәл итеүгә ҡағылышы булған башҡа ойошма вәкилдәренең фекере буйынса, төбәктә һөт кухняһын тергеҙергә, күп балалы ғаиләләргә балаларҙың мәктәптә туҡланыуына субсидияларҙы ҡайтарырға, элек алып барылған "Ғаилә тормошоноң этикаһы һәм психологияһы" дәресен белем биреү процесына индереп, йәштәргә ғаилә тормошона әҙерләргә кәрәк.

✓ **16-21 апрелдә Дыуан районында "Аграр туристик эшҡыуарлыҡты ойоштороу" белем биреү программаһы буйынса ҡайтанан әҙерлек һәм квалификацияны камиллаштырыу курстары уҙғарыла.** 72 сәғәтлек курстар Урал арьяғын иҡтисади үҫтереү һәм республиканың көньяҡ-көнсығыш районларын социаль-иҡтисади үҫтереүҙең урта сроклы комплексы программалары сиктәрендә федераль ҡазна иҫәбенә үткәрелә. Агротуризм буйынса курстарҙың программаһы бик бай һәм төрлө. Республикаға саҡырылған агротуризм өлкәһендәге эксперттарҙан тыш, тыңлаусылар алдында атлы туризмды, балыҡсылыҡты үҫтереү өлкәһендәге эшҡыуарҙар һәм белгестәр сығыш яһай. Бынан тыш, республиканың төньяҡ-көнсығыш районларындағы агротуристик хужалыҡтарға барыу ҡаралған.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# РӘМИ ЙӘШӘЙ ИКӘН...



Александр Королев фотоһы.

**Ошо көндәрҙә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәми Ғариповтың тыуыуына 85 йыл тулыуға "Ғарипов уҡыуҙары" төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙғарылды.**

Был юлы ла сараға шағирҙың ижадына битараф булмағандар күпләп йыйылды. Унда яҙыусылар Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбай, СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Мөбәрәкова, профессор Фирҙәүес Хисаметдинова, шағирҙың улы Азамат Ғарипов һәм башҡа күренекле шәхестәр ҡатнашты. Шағир менән яҡындан аралашҡан, бергә уҡыған, фекерҙәш булған был кешеләр уның тураһында ҡыҙыҡлы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Республиканың төрлө төбәктәренән килгән ҡатнашыусылар һәр сығыш яһаусыны, шулай уҡ Рәми Ғариповтың гимназия-интернатың 11 синыфында белем алыусы бүләре Тимур Уледановты йотлоғоп тыңланы.

- Бөгөнгө "Ғарипов уҡыуҙары"ның Халыҡ-ара туған телдәр көнө менән тап килеүе бер ҙә осраҡлы түгел, - тине үҙенең сығышында Рауил Бикбаев. - Ул Рәми ағай ижадының рухын, булмышын сағылдырып тора. Теүәл ҡырҡ йыл элек шағир ҡапыл беҙҙең аранан китеп барҙы. Ваҡыт үтеү менән шағирҙың ижады өсөн бәхетле йылдар килде. Рәми Ғарипов ижады йәшәй икән, халҡыбыҙ һәм уның теле тере буласаҡ...

Бик күптәнге йола буйынса, сара барышында Ғарипов исемендәге премия ла тапшырылды. Быйыл был премияға СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Мөбәрәкова һәм Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 11 синыф уҡыусылары Алина Мәзитова, Әғләм Юлгилдин, Миләүшә Шәрәфетдинова **(һүрәттә)** лайыҡ булды.

- Минең өсөн бөгөн бик тантаналы көн. Мәскәүҙә бер мәлдә уҡыған, аралашып йөрөгән иптәшем исемендәге премияны алдым, - тип ҡыуынысы менән бүлеште Гөлли Арыҫлан ҡыҙы. - Йәшлек саҡтары, бергәләп концерттар ҡуйған, студенттар йыйындарына йөрөгән, беҙ сәхнәләштергән спектаклдәрҙе ҡарап бәхәсләшеүҙәр күҙ алдыма килеп баҫты. Йәшләй генә арабыҙҙан киткән шундай шәхес ошо күркәм юбилейына тиклем йәшәһә, тағы ла ниндәй бөйөк шиғри юлдар ижад итер ине, тигән уй килә. Рәми Ғариповтың бик күп шиғырҙарын яттан беләм һәм уларҙың төпһөҙ дингеҙ кеүек тәрәнлегенә, шул юлдарҙа йәшеренгән фекер, хистәр, аҡылға хайран ҡалам...

Көслө рухлы, кешелекле, гүзәл һүҙле Рәмиҙе үҙенә өлгө итеп күргән һәм премияға лайыҡ булған тырыш, һәр яҡлап та алдынғы уҡыусылар ҙа рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Киләсәктә үҙҙәре белем алған гимназия-интернат исеменә тап төшөрмәҫкә, халҡына кәрәкле ул һәм ҡыҙҙар булып үҫергә вәғәҙә бирҙе улар. Артабан, "Ғарипов уҡыуҙары"нда ҡатнашыусы уҡыусылар секцияларға бүленеп, докладтар менән сығыш яһаны. Һәр төркөм араһында енеүселәр айырым бүләкләнде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәми Ғарипов шаҡыған киләсәктең ишектәре шағирға күптән асылған. Инде нисә быуын кешеһе төрлө кәртәләр, ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡҡан шәхесте таңый, ижадын күңеленә яҡын итә. Халҡының киләсәге өсөн янып-көйгән, хаҡлыҡ һөйгән шағирҙың өмөттәре аҡланды, тиһәк, һис хаталанмаҫбыҙ. Сөнки "Ғарипов уҡыуҙары" төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференцияһында ҡатнашыусы һәр кемдең уны танып белә, хөрмәт итә һәм үҙенән ҡала килгән быуынға ла ошо белемде еткерәсәк икәненә инандыҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЮЛДАР, ЮЛДАР...



**Өфө агломерацияһы (Өфө ҡалаһы һәм яҡын районлары - Өфө, Благовещен, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Шишмә) "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" тигән өҫтөнлөклө проектҡа инде.**

Программа 2025 йылға тиклем республикаға федераль бюджеттан йыл һайын 1-әр миллиард һум бүлеү һәм төбәк ҡаҙнаһынан шундай уҡ күләмдә өҫтәмә финанслауҙы күҙ уңында тота. Тотош осорға дөйөм саралар күләме - 18 миллиард һум. Быйыл программа проектҡа индерелгән юл селтәрҙәренең яртыһынан күберәген норматив торошҡа килтерергә һәм аварияһар йыш осраған участкаларҙы иҫәбен ике тапҡырға кәметергә ҡуҙалай. Өфөлә 2017-2018 йылдарҙа дөйөм оҙонлоғо 139 саҡрым тәшкил иткән 72 урамды йүнәтеү һәм юл-транспорт ваҡиғалары йыш булған 41 урынды бөтөрөү планлаштырыла. 2017 йылда йүнәтеү эштәре ошо урамдарҙа күҙалланған: Жуков урамы - 4 саҡрым, Сельская Богородская - 5,5, Трамвай - 4,5, Салауат Юлаев проспекты - 5,5, Октябрь проспекты - 2,5, Цюрупа - 2,5, Интернациональ - 4, Ульяновтар - 3,4, Вологда - 3,1, Сосновский - 3,1, Сипайлово урамы - 3 саҡрым.

* * *

**2017 йылда Башҡортостанға федераль әһәмиәттәге автомобиль юлдарын тәртиптә тотоуға һәм ремонтлауға 9 миллиард һум аҡса бүленәсәк.**

Шуларҙың 4,2 миллиард һумы - капиталь ремонтҡа, 4 миллиарды - тәҙәлешкә һәм реконструкцияға, 1 миллиарды тәртиптә тотоуға йүнәлтелә. 267 саҡрымлыҡ юлдар һәм 964 погон метрлыҡ яһалма ҡоролмалар тейешле хәлгә килтерелә. Объекты төҙәкләндерергәндән һуң М5 "Урал" юлының 1466-1480-се километрында Өфө янында Ағиҙел йылғаһы аша күперҙә файҙаланыуға тапшырыу ҡаралған. М5 трассаһында эштәр дауам итәсәк: Бүздәк районы биләмәһендә 1360-1375 саҡрымлыҡ участка, 1375-1401 - Благовар һәм 1406-1480 - Благовар һәм Иглин районлары биләмәһендә; М7 трассаһының 1310-1321 километрлыҡ участкаһы - Шәрип һәм Өфө араһында. Стәрлетамаҡ районында Ырымбур трассаһының 87-се һәм 105-се километрында, Туймазы районында Кендектамаҡ ауылы эргәһендә М5 трассаһының 1318-се километрында һыу торбалары төҙөкләндерелә.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөләге Якутов исемендәге паркта 4 һәм 5 мартта "морждарҙың" Еңеү көнөнә арналған ярышы уҙа. Унда 300-гә яҡын кешенең ҡатнашыуы көтөлә. Ҡышҡы йөҙөүҙе үҙ итеүселәр унар кешенән торған 30 командаға бүленәсәк. Акция яҡшы йолаға әүерелгән һәм илебеҙҙең күпселек төбәктәрендә уҙғарыла. Атап әйткәндә, тәүлек марафонына Алтай крайы, Силәбе өлкәһе, Түбән Ҡышҡы йөҙөүселәре ҡушыласаҡ.

✓Уҙған шәмбе Өфөлә башҡорт халҡының иң ҙур ырыу берләшмәләренең береһе - Табын ырыуы вәкилдәренең дүртенсе съезы үтте. Форум эшендә республиканың 11 районы, шулай уҡ Ырымбур, Һамар, Һарытау, Ҡурған һәм Силәбе өлкәләре делегаттары ҡатнашты. Форум делегаттары яҙыусы һәм журналист, йәмәғәт эшмәкәре Ниязбай Сәлимовты табындарҙың етәксеһе итеп һайланы.

✓Венгрияла венгр йәки инглиз телдәрендә уҡыу программаһы буйынса Рәсәй студенттары өсөн йәмғеһе 200 грант бүленә. Уҡыу бушлай. Бынан тыш, айлыҡ стипендия түләнә, дөйөм ятаҡта урын бирелә йәки ҡуртымға алған бүлмәлә йәшәү өсөн аҡса түләнә, медицина страховкаһы бүленә. Был программа Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы менән Венгрияның Социаль ресурстар министрлығы араһында төҙөлгән Килешеү нигеҙендә ғәмәлгә ашырыла. 2017-2018 уҡыу йылдарына "Stipendium Hungaricum" стипендия программаһына ғаризалар 5 мартҡа тиклем ҡабул ителә.

✓Өфө хакимиәте V "Йыл меценаты" ҡала конкурсының башланыуы хаҡында иғлан итте. Жюри алдында "Социаль яуаплы ойошма", "Социаль йүнәлешле коммерцияға ҡарамаған ойошма" (юридик берәмектәр араһында); "Изге йөрәк" (шәхси эшҡыуарҙар һәм физик берәмектәр араһында) номинацияларында иң яҡшыларҙы һайлау бурысы тора. Ҡатнашыуға документтар 30 мартҡа тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450098, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 114/1, 8-се бүлмә. Тел.: 235-99-58.

✓Башҡортостанда 2017 йылда "Һөнәре буйынса иң яҡшы" республика конкурсы номинациялары билдәләнде. Быйыл "Һөнәре буйынса иң яҡшы" VI Бөтә Рәсәй һөнәри оҫталыҡ конкурсының "Иң яҡшы умартасы" номинацияһында федераль этабы Өфөлә үтәсәк. Былтыр республикала иң яҡшы тигән исемгә фрезеровщиктар, токарҙар, урман ҡырҡыусылар, электр һәм газ менән иретеп йәбештереүселәр, малдарҙы яһалма аталандырыу операторҙары һәм штукатурсылар ярышты.

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ Гүзәл Хамматова - яҙыусы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Яныбай Хамматовтың ҡыҙы. "Ижади хеҙмәт титаны" тип йөрөтә замандаштары Яныбай ағайҙы. Сөнки бөтөн донъяла уның кеүек ике тиҫтә роман яҙған яҙыусы бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ҡыҙы Гүзәл Хамматова телсе, тәржемәсе, хаҡлы ялға сыҡҡансы Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институтында немец теленән уҡытҡан. Әңгәмә - уның менән.**

# МИЛЛИ ҮҘАҢ...

## ғаиләлә тәрбиәләнә



**➔ Бәләкәй саҡта бар донъя башҡараҡ булып тойола, Һеҙҙең бала сағығыҙҙағы Өфө ниндәй ине?**

- Ул саҡта Өфө шул тиклем йәмле, ҡотло ине кеүек. Бәләкәй генә матур ҡала ине ул. Октябрь проспекты төҙөлмәгәйне. Әсәйемдең атай-әсәһе Өфөлә йәшәгән, олатайым "Гәлиә" мәҙрәсәһендә уҡыған, Граждандар һуғышында ҡатнашҡан. 1920 йылдарҙа Өфөнөң егеүле транспортын етәкләгән. Ғәҙәттән тыш хәлдәр комиссияһы заданиеһы буйынса ғаиләһе менән Чита ҡалаһына күсеп китәләр һәм әсәйем шунда тыуған. Атаһы үлгәс, ике бала менән ҡалған нәнәйем кире Өфөгә ҡайтырға мәжбүр була. 1944 йылда туғандарына эйәреп, Ялтаға йүнәлә. Һуғыштан һуң фатирҙарын Октябрь революцияһы урамындағы бәләкәй генә йортҡа алыштырып, Өфөгә ҡайталар. Атайым 1946 йылға тиклем һуғышта була, унан ВЛКСМ-дың Белорет район комитетында эшләй, 1947 йылда 1-се секретарь итеп һайлана. 1949 йылда Өфөгә күсеп килә. Әсәйем менән танышалар, һуңғараҡ мин донъяға килгәнмен.

Ул мәлдә машиналар бик әҙ ине. Әсәйемдең әсәһе Глумилина йәшәне, ул ауыл һымаҡ ине. Трамвай менән барабыҙ ҙа, әллә күпме йәйәү атлай инек. 1953 йылда асылған "Родина" кинотеатрын яратам. Ял көндәрендә уның алды тулы халыҡ була. Берәй шәп фильм күрһәтелһә иһә, кассаларға яҡын барырлыҡ түгел. Был кинотеатрға нигеҙ һалыусы, уның беренсе директоры булып эшләүсе Миәсс башҡорто Ғабдрахман Хәкимулла улы Фәттәхетдинов минең нәнәйемдең һеңлеһенең ире ине.

**➔ Тыуған йортом тип ниндәй йортто иҫәпләйһегеҙ?**

- Миңә 4-5 йәш булғансы, беҙ Октябрь революцияһы урамындағы йортта йәшәнек. Ул хәҙер юҡ. Өфөләге тәүге коттедждар шул урында төҙөлдө. Әле Октябрь революцияһы һәм Цюрупа урамдары мөйөшөндә Цюрупаға һәйкәл торған ерҙә балалар баҡсаһы ине. Шуныһы ҡыҙыҡ, әсәйем дә ошо уҡ балалар баҡсаһына йөрөгән. Аҙаҡтан атайыма Чернышевский-Цюрупа урамдары киҫелешендәге өс ҡатлы йорттан фатир бирҙеләр. Әбйәлилгә киткәнсе шунда йәшәнек.

Өфөлә бер нисә тапҡыр фатир алыштырҙыҡ. Әбйәлилдән ҡайтҡас, Октябрь проспектында йәшәнек, ул ҡалалағы беренсе хрущевкаларҙың береһе ине. Уның ҡаршыһында аэродром була торғайны. 18/1-енсе йортта беҙ 8 йыл йәшәнек, мин 100-сө мәктәпте тамамлар йылды Цюрупа-Достоевский киҫелешендәге йортҡа күстек. Шул йорттан кейәүгә оҙатылдым, ҡыҙым тыуҙы. Әле лә торған фатирыбыҙ Цюрупа урамында. Әтай йорто тип 39-сы гиназия эргәһендәге йортто иҫәпләйем, унда атайыма таҡтаташ ҡуйылған.

**➔ Ғаиләгеҙҙә тыуған телгә мөнәсәбәт ниндәй ине?**

- Мин тыуғанда атайым партия өлкә комитетында вазифалы эштә була, әсәйем пединститутта филология факультетында уҡыған. Атай менән әсәйҙең ваҡыты етмәү сәбәплеме, әллә ул заманда русса һөйләшеү өҫтөнлөклө һаналыу арҡаһындамы, минең телем урыҫса асылған. Ә өйҙә атай менән әсәй үҙ-ара туған телдәрендә аралаша ине. 1960 йылда атайымды Әбйәлилгә, район башҡарма комитеты рәйесе итеп күсерҙеләр, тигәйнем инде. Ул алдараҡ китте, уҡыу йылы тамамланғас, әсәйем менән мин атайым артынан ҡуҙғалдыҡ. Минә ете йәш ине. Шунда мин беренсе тапҡыр башҡорт телле мөхиткә эләктем, сөнки был районда хатта урыҫтар ҙа башҡортса һөйләшә ине.

Атайым үҙенең автобиографик әҫәрендә лә яҙа бит, партияның өлкә комитетында эшләүсе башҡорттар бармаҡ менән генә һанарлыҡ була. Башҡортса, татарса яҙылған хаттарҙы, ялыуҙарҙы уҡытыу, тәржемә иттереү өсөн гел атайыма мөрәжәғәт итәләр. Атайым башҡорт телен уҡытыуҙың, башҡорт телендә һөйләшеүҙең кәрәклеген аңлай, хатта "Совет Башҡортостаны" гәзитендә ошо мәсьәләгә ҡағылышлы мәҡәләһе өсөн тәнҡит утына ла тотола. "Бына мин халҡым өсөн яҙам, ни эшләп мине балаларым уҡымаҫҡа тейеш!" тип әйтәсәк аҙаҡтан атайым яҙыусы булып киткәс. Ул халҡына, теленә гел тоғро булды.

Атайым беҙҙең ҡыҙыбыҙ Алһыуҙы балалар баҡсаһына барғанға тиклем үҙе ҡараны. Кабинетында ҙур ғына диван тора ине, бала шунда уйнап ултыра, үҙе яҙыша. Ваҡыты етһә, ашата, урамға алып сыға. Бына шул мәлдәрҙә уның менән рәхәтләнеп башҡортса аралаша. Бына шуға ла ҡыҙымдың теле башҡортса асылды. Ул мәлдә "Сәнгелдәк" тапшырыуы ла, "Аҡбуҙат" журналы ла, "Тамыр" студияһы ла юҡ. Былар барыһы ла суверенитет яулағандан һуң барлыҡҡа килде. Алһыуға "Башҡортостан пионеры" гәзитен ("Йәншишмә") генә алдыра инек. Ҡызым миҫалында баланың күңеленә телгә һөйөү, рух өйҙә, ғаиләлә һалына икәнен аңланыҡ. Атайыма телефондан шылтыратҡан кешеләр Алһыуҙың башҡортса матур итеп һөйләшеүенә хайран ҡала ине. Ҡыҙыма башҡортса өйрәтәм, тип, үҙем дә һөйләшергә өйрәндем. Атайымдың әҫәрҙәрен урыҫсаға тәржемә итәм.

**➔ Атай буларак, Яныбай ағай ниндәй инде?**

- Бик ихлас кеше ине ул. Талапсан ине. Беҙгә ҡарата ғына түгел, беренсе нәүбәттә - үҙенә. Шарттар ҡуя ине үҙенә, уларҙы үтәй ине. Иртәнсәк тора, әсәйемде эшкә оҙата, шунан саф һауала йөрөп әйләнә. Шунда уҡ әҫәре өҫтөндә уйлана башлай, ҡайтып, өҫтәл артына ултырып дауам итә. Ғаиләһен бик яратты. Үҙе әсәһенән 4 йәшендә генә ҡалғаран, 8 йәштән йорт эштәрен башҡарған. Шуға күрәләр ҙә, бер ваҡытта был ҡатын-ҡыҙ эше, был ир-ат эше, тип тормаһы, әсәйемә ныҡ ярҙам итә ине.

Баҡсаһы ниндәй ине уның! 50 йыл элек Әлкә эргәһендә яҙыусылар ҡасабаһы барлыҡҡа килгәс, атайым унда ниндәй генә ағас ултыртманы. Урман кешеһе буларак, гел урманын һағынып йәшәгән кеүек ине миңә. Эрбет (кедр) сәтләүеге сәсеп, уның берәүһе үҫеп китте. Емештәре 45-50 йылдан һуң булыр, тигәйне. Хәҙер шул ағас емеш бирә. Баҡсала ижад итте күп романдарын. Аҙ ғына тәнәфес эшләп алғанында баҡса эше менән була ине. Тәбиғәт кешеһе ине. Тыуған ауылын да һағынды. Бесән сапҡан ерҙәремде күрһәтермен, ти ине. Әле беҙ Исмаҡайға бер көнгә булһа ла ҡайтып әйләнәбеҙ. Унда атайымдар йәшәгән йорттоң урынына һалынған йортҡа таҡтаташ ҡуйылған, музейы бар. Белорет ҡалаһында уның исемен йөрөткән Башҡорт гимназияһы бар.

**➔ Ҡыҙығыҙ Алһыуҙың хәҙер үҙенең ике ҡыҙы бар икәнен беләбеҙ. Бүләсәләре лә ҡарталарының романдарын туған телендә уҡый алһын өсөн нимәләр эшләйһегеҙ?**

- 2000 йылда атайым арабыҙҙан китте, бер йылдан ҡыҙым кейәүгә сыҡты. Кейәүебеҙ Ейәнсуранан. Ҡыҙҙары тыуғас, ҡыҙым олатаһы тәжрибәһенән сығып, уны башҡортса өйрәтә башланы. Әйшәгә 4 ай ғына, ә ул уға башҡортса шиғырҙар уҡый ине. Шул бәләкәй баланың башҡорт теленең моңона шатланыуын күрһәгеҙ икән! Гел башҡортса китаптар уҡыйҡ уларға. Ғөмүмән, "Китап" нәшриәтендә балалар әҙәбиәтенә иғтибар ҙур хәҙер, матур китаптар сығаралар, уларҙы һәр ваҡыт һатып алабыҙ. Ҡыҙҙарыбыҙ менән башҡортса һөйләшәбеҙ, сөнки рухлы булыуҙың нигеҙе - ул туған тел. Улар икеһе лә, әсәләре кеүек үк, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында белем ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, ауылдамы, әллә ҡалала йәшәһенме, башҡорттар өсөн ғаилә иң ҡиммәтле төшөнсә һанала. Шуға ла тап ғаиләлә тәрбиәләнә әхлаҡи ҡиммәттәр ҙә, туған телгә, республикаңа һөйөү ҙә. Үҙенең исеме төрлө юғары дәрәжәләге исемдәр менән баһаланмаһа ла, ижады уҡыусыһы тарафынан юғары баһаланган бөйөк яҙыусыбыҙ Яныбай Хамматовтың ғаиләһе лә ошоға асыҡ миҫал. Һәм милли әҙәбиәт өлкәһенә улар бөгөн дә үҙ өлөшөн индереүен дауам итә.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тотлоғоуҙан

❖ 0,5 л һыуға 2-3 ҡалаҡ кипкән алма ҡабығы һәм 1-2 семтем лимон бөтнөгө һалырға. Ҡайнап сыҡҡас, 5-7 минут утта тоторға. 15 минут төнәткәс, икегә бүлеп, йылы көйө 2 тапҡыр эсергә. Был төнәтмәне кискеһен эсергә, ә иртәнсәк һөттә ҡайнатылған ҡаҙ үләне (лапчатка гусиная) төнәтмәһе эсергә. Һөт яратмағандар виноград һутында бешерһә лә ярай. Ҡаҙ үләнен 0,5 л һөттә йәки виноград һутында 5-6 минут ҡайнатырға, үләнде 2 семтем генә һалырға. 15 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм икегә бүлеп эсергә.

Был ике төнәтмә лә зыянһыҙ, 2 аҙна буйы көн һайын эсергә, бер аҙ тәнәфестән һуң дауам итергә. Ҡаҙ үләне төнәтмәһе ҡан туҡтатыу, көҙән йыйырыуға ҡаршы, йәрәхәт төҙәтеү өсөн дә ҡулланыла. Һөттәге төнәтмәһе көслө һейҙек ҡыуғыс, әммә ул бөйөрҙәргә насар тәьҫир итмәй.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Дарыуһыҙ ғына ҡан баҫымын төшөрөргә була. Ике ҡолаҡҡа ла бер үк мәлдә массаж: ҡолаҡ япраҡтарына аҫтан өҫкә, шунан ҡолаҡ эсенә өҫтән аҫҡа табан һыпыра кәрәк. Көнөнә 5-6 мәртәбә шулай һылап-һыйпау ҡан баҫымын нормаға килтерә.

### Тамаҡ ауыртҡанда

❖ Стаканға сөгөлдөр ҡырып һалырға, 7 ҡалаҡ һеркә ҡушырға, бер аҙ торорға, һутын һығып алырға һәм шуның менән тамаҡты сайҡатырға, әҙ генә йоторға ла була.

❖ Көнөнә 3-4 балғалаҡ башлы һуған һуты эсеү ҙә тамаҡ ауыртыуын бөтөрә.

### Күҙҙәр өсөн

❖ Эшегеҙҙә күҙҙәргә көсөргәнеш төшкәндән күҙҙәр ауырта, насар күрә башлаһа, 3,5 ай буйына 100 г һарыҡ бауырынан һурпа ҡайнатып эсергә һәм бауырҙы иртәнсәк йәки төшкә аш алдынан ас ҡарынға ашарға кәрәк. Һыйыр бауырының файҙаһы әҙерәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ Батыр ир-егеткә ҡыҙҙар үҙҙәре һырығып-һылашып барғас, улар ҡайһыһын хуш күрә, шуныһына тота ла өйләнә. Тик шуныһы: Хоҙай бар ир-атҡа ла батырлыҡты бер тигеҙ итеп бүлеп бирмәгән шул.



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Тәңкәләрҙән тыш, Дим буйы еләндәрен теген машинаһы йөйҙәре менән биҙәйҙәр.**

Еңдең, елән итәгенең ситтәре, еләндең арҡа өлөшө ошондай йөй менән һырлана. Иң ҡыҙығы, был биҙәк-һырҙар Урал аръяғы камзулдары биҙәктәре кеүек үк. Еңһеҙ кейемдәр араһынан биле беленеп торған һәм аҫҡы өлөшө киңерәк камзулдар иғтибарға лайыҡ **(һүрәт)**. Улар уҡа, ҡайһы саҡта тәңкәләр һәм яһалма кеҫәләр менән биҙәлә.



Дим буйы башҡорттарының кейемендә донъя картинаһы беҙ алдан ҡараған костюмдарҙыҡы кеүек үк. Дим комплексы тәбиғәт-климат зонаһы буйынса урман-далаға ҡарай, шулай уҡ тауҙар ҙа бар. Еләндең итәге буйлап һалынған фигуралар, бәлки, бейек булмаған ошо тауҙарҙы һүрәтләйҙер. Улар Урал тауҙарынан айырыла, был кейемдәрҙәге орнаменттарҙа ла күренә **(һүрәт)**.



Борондан башҡорттар һәр түбәләскә иғтибар биргән, сөнки уларға менеп, тирә-яҡты контролдә тоторға мөмкинлек булған. Шул рәүешле улар ҡала, ауылдарҙы дошмандан һаҡлаған. Миҫал итеп Шишмә районындағы археологик ҡомартҡы - Ҡара Яҡуп мәҙәниәтен килтерергә була. Ул хәҙерге Ҡара Яҡуп ауылынан ярты саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан булған, VIII-IX быуаттар менән билдәләнә. Әлеге ваҡытта ҡаласыҡ урынын Ҡала тау тип йөрөтәләр. Ҡаласыҡ бейеклектә урынлашҡан булған, етмәһә, эске яҡтан таш нигеҙле вал менән, тыштан шулай уҡ таш менән, уның өҫтөнән ҡойма менән уратып алынған. Шуға ла тау йәки бейеклектәр, убалар һүрәте Көньяҡ-көнбайыш башҡорттары кейемендә урын алған **(һүрәт)**.



Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары кейемендәге кеүек үк, өҫкө донъя символы булып ҡашмау, оҙон яулыҡтар тора. Урта донъя кимәлендә мотлаҡ рәүештә тау, йәки тау һыҙаттары һүрәтләнгән. "Тау" символы аҫтынан, ҡағиҙә булараҡ, "йылға" һүрәтләнгән, йылғаны күлдәк итәгенә һалынған таҫма күрһәтеп тора. Аҫҡы донъя ҡара төҫтәге аяҡ кейемендә күренә.



Шулай итеп, Дим йәки көньяҡ-көнбайыш комплексы костюмы бер-береһенән айырылып торған ике мәҙәниәт: күсмә тормош һәм ултыраҡ тормош йоғонтоһо аҫтында үҫешә **(һүрәт)**.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИР-АТ ҠОЛАҒЫНА

**Һигеҙенсе март байрамы етә башлаһа, ир-ат ҡатын-ҡыҙға ярарға тырышып, ниҙәр генә ҡылырға белмәй. Аптырарлыҡ та шул: байрам йыл һайын ҡабатланып тора, ә бүләктең былтырғыһы ишен алып булмай бит, берҙән-береңдең үпкәләп ҡуйыуы ла бар. Ана, ҡатынға булмай ярап, тип, йыр ҙа сығарып бөткәндәр шуның өсөн. Ир-атҡа ҡыйын инде ул: егет сағында күҙ атып йөрөгән һылыуына ярайым, тип ниндәй генә сүрәткә кермәһә, өйләнгәс, ҡатын-ҡыҙ ҡанундарына яраҡлашам, тип, утҡа ла инергә, һыуға ла төшөргә тура килә. Әммә бик теләһәң, егет саҡта ла, ир-уҙаман булғас та ҡыҙ-ҡатынға ярап та, оҡшап та була ул. Үҙ холоҡ-булмышыңа тура килгән ролеңде бирелеп уйнаһаң, уңырһың. Ошо ролдәрҙең ҡайһы бере һеҙгә лә ярап ҡуйыуы бар, оҡшаһа, мотлаҡ һынап ҡарағыҙ, ир-егеттәр!**

# ҠАТЫНҒА БУЛМАЙМЫ ЯРАП?

## Түбәндәге шарттарҙы үтәп ҡара, улайһа...



### Батыр егет

Ҡыҙҙарҙың күҙенә иң беренсе батыр малайҙар салына. Улар бер нәмәнән дә, бер кемдән дә ҡурҡмай бит. Хатта күрше-күлән йәки класс етәксеһе ундай малайҙарҙы "хулигандар" рәтенә ҡуйһа ла, улар ҡыҙҙарҙың күҙенән дә, теленән дә төшмәй. Быңдай малайҙар әрме хеҙмәтенән дә ҡасмай, хатта ҡайһы берҙәре унан миҙал да тағып ҡайта. Батыр ир-егеткә ҡыҙҙар үҙҙәре һырығып-һылашып барғас, улар ҡайһыһын хуш күрә, шуныһына тота ла өйләнә. Тик шуныһы: Хоҙай бар ир-атҡа ла батырлыҡты бер тигеҙ итеп бүлеп бирмәгән шул. Хатта батырҙарҙан бахырҙар күберәк булып китә. Шуға күрәлер ҙә инде, хәҙерге ҡыҙҙар үҙҙәренең хыялында йәшәгән батырҙы көтөп, кейәүгә сыға алмай, зар-интизар булып йөрөй.

Бына шуның өсөн йәш егеттәребеҙгә ҡыҙҙар күңелен тиҙ генә яулар өсөн үҙҙәрен батыр ролендә күрһәтә белергә кәрәк. Нисек итепме? Әлбиттә, бының өсөн ниндәйҙер батырлыҡ күрһәтеүҙең бер кәрәге лә юҡ, әмәлен тапһаң, батырҙарҙың батыры булып күренергә лә була. Иң һөҙөмтәлеһе: ҡыҙҙар менән бер компанияла булғанда дуҫ-иштәрең һинең элекке, ҡыҙҙарға билдәһеҙ тормошоңда шундай һоҡланғыс мәлдәр булыуы тураһында береһенән-береһе уҙҙырып, маҡтай-данлай алырға тейеш. Алдан һөйләшеп килешеү буйынса, ҡыҙыңды оҙата барғанда бер-ике "хулиган" осрап, бәйләнә башларға, ә һин уларҙы уңлы-һуллы һелтәп ташларға тейешһең - ҡыҙың өсөн һинән дә батырыраҡ башҡа берәү табылмаясаҡ. Егет саҡтағы бындай "батыр ҡылыҡ"тарыңды ҡатының да онотмаҫ, йылмайып-көлөп, иҫенә төшөрөп торор.

### Йомарт ир

Йомарттар кемгә генә оҡшамай ҙа, уларҙы кем генә яратмай. Минеңсә,

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ХУР ҠЫҘҘАРЫ...

## шул уҡ ҡояш ҡыҙҙары ла инде



**Башҡорттар матур ҡыҙҙарға һоҡланғанда "хур ҡыҙҙары" тигән һүҙбәйләнеш ҡуллана. Был һүҙбәйләнештең "хур" тигән өлөшөн телселәребеҙ Ислам дине аша, ғәрәп теленән килеп ингән һүҙ, тип, "гүр, теге донъя" менән бәйләй. Йәнәһе, Ислам дине буйынса, хаҡ мосолмандарҙы теге донъяла матур ҡыҙҙар көтә, имеш. Был аңлатыу бигүк ышандырмай. Теге донъя, билдәле булыуынса, үлеләр, мәйет менән бәйле. Шулай булғас, теге донъя персонаждарын бер нисек тә матурлыҡ менән бәйләп булмай кеүек. Минеңсә, "хур ҡыҙҙары" тигән һүҙбәйләнештең "хур" тигән өлөшө боронғо иран телендәге ҡояшты аңлатыусы "хур", "ур" тигән һүҙ булырға тейеш.**

Тарихсы, телсе ғалимдар әйтеүенә ҡарағанда, башҡорт халҡының формалашыуында боронғо дәүерҙәрҙә Көньяҡ Уралда йәшәгән иран телле сармат, алан ҡәбиләләре ҙур роль уйнаған. Билдәле телсе ғалим Н.К. Дмитриев фекеренсә, башҡорт телен бүтән төрки телдәренән ныҡ айырып тороусы "һ" өнө ана шул боронғо иран телдәренән ҡалған реликт булырға тейеш. "Ҡояш" тигәнде аңлатҡан "хур", "ур" һүҙе Памир тауҙарында йәшәгән аҙ һанлы ҡайһы бер иран телле халыҡтар (бартанг, вахан, ишкашим, рушан, язгүләм һ.б.) телендә һаҡланып ҡалған. Был ҡайһы берҙәренең һаны меңгә лә тулмаған халыҡтарҙы ғалимдар иран телдәрендә һөйләшкән боронғо халыҡтарҙың төрлө тарихи мөғжизәләр арҡаһында

әүәл иң бай түгел, ә иң йомарт башҡорттар ғына өсәр-дүртәр ҡатын алып йәшәй алған. Йомарт булмаһаң, бер күңелеңдә яралған хисдәртеңде өс-дүрт өлөшкә бүлә алыу мөмкин дә булмаҫ ине. Ана, урыҫтар ҙа йомарттарҙы бик хуп күрә, улар хатта йомартлыҡ менән бәйле "на халяву" тигән төшөнсә лә уйлап тапҡан.

Күҙең төшкән берәй ҡыҙҙы үҙеңә ҡаратам, тиһәң, кесәңдәге аҡсаңды һанап ултырмайһың инде. Бында икенең береһе: йә аҡсанан, йә ҡыҙҙан ҡолаҡ ҡағаһың. Иң мөһиме, ҡыҙыңдың нимәгә әүрәгәнен белергә кәрәк. Быны тәжрибә эшләп тә белеп була. Ҡыҙҙарҙың күбеһе тәмле тамаҡ бит, кәнфит-шоколад, тортмаҙарһыҙ улар эргәһенә барып йөрөмәҫкә лә мөмкин. Уларҙың сәскә күреү менән һушы алынғанын да оноторға ярамай. Ә хушбуйҙың тик Парижда килтерелгәнен бүләк итһәң, ҡыҙыңдың йөҙө май ҡояшындай балҡыясаҡ. Ҡыҫҡаһы, һин ни тиклем йомарт ҡыланһаң, ҡыҙыңдың ҡараштары ла шул тиклем ағымлы, күңеле лә йомшағыраҡ булыр. Өйләнгәс, йомартлығыңдың сауабын күрерһең: хәләлең дә үҙең кеүек алсаҡ һәм киң күңелле булыр.

## Ялағай

Маҡтағанды кем генә яратмай икән. "Һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырыу", ти халыҡ ошо хаҡта. Маҡталған әҙәм үҙен башҡаларҙан шәһрәтлерәк, ҡөҙрәтлерәк, алдынғыраҡ итеп тоя, кәйефе лә күтәренке, йөҙө лә яҡты була. Үҙең маҡтанмаһаң да, башҡаларҙан маҡтала, данлана алыу егетлек һанала. Дан-шөһрәткә илткән юл маҡталыуҙан башлана. Кемдәлер маҡтайһың икән, ул кеше тап һине яҡыныраҡ күрәсәк, кәрәк саҡта ярҙам да итәсәк. Кеше маҡтап, үҙең дә яҡшыраҡ булып күренә алаһың.

Ҡатын-ҡыҙ заты маҡтағанды айырыуса ярата бит, һәм уларҙың ошо сифатынан үҙеңә файҙа табып була. Ҡыҙҙарҙың һәр ҡайһыһы матурыраҡ булып күренергә тырыша, шулай булғас, үҙең һайлағанын да килештерер маҡтай алыу кәрәк. Матур һүҙҙәреңде йәлләмәһәң, гүзәл зат та йылмайып-көлөп торасаҡ. Ҡыҙҙарға яҡшы һүҙ әҙләп, йөҙәп тораһы ла юҡ: буй-һыны, сәс толомдарын, ҡарашын, йылмайыуын гүзәлләп, кейгән кейеменең дә шул тиклем килешле икәнен белдерһәң, хаттин аша. Ҡыҙ йөрәгенә юлдың тел аша һалынғанын онотмағыҙ, егеттәр! Ә өйләнгәс, хәләл ефетең алдында ялағайланмай ғына ҡара - ул әүәл ниҙәр һөйләп, ниҙәр вәғәҙә иткәнеңде тиҙ иҫенә төшөрәр.

## Тыңлаусан малай

Артыҡ инициатива күрһәтмәйенсә йәшәп тә өлгәр исемен алып була. Барыһына ла алдан сабыулап йөрөргә тимәгән бит. Түрә ҡушҡанды ваҡытында һәм еренә еткереп башҡарһаң икән, һинең дә урының түрҙә буласаҡ. Ғөмүмән, бөгөн үҙ һүҙләләр түгел, тыңлаусан заттар алға сыға.

Ошо тормош ҡануны ҡатын-ҡыҙ менән мөнәсәбәттәрҙә айырыуса яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Заман ҡатынҡыҙҙары үҙ ғаиләһендә булһа ла түрә булырға ярата, үҙе бойорғанды теүәл үтәлеүен теләй. Шуға күрә ҡыҙҙар дуҫлашып йөрөгән егетенең үҙҙәре талап иткәнде нисек үтәй алыуына айырыуса иғтибарлы була. Нисек кенә булмаһын, ҡатын-ҡыҙ үҙен аҙмы-күпме "королева" итеп күргеһе килә. Өйләнешкәс, улар үҙҙәренең ауыҙына ғына ҡарап торған ирен тыңлаусан малайҙай итеп күрә лә, арҡаһынан тупылдатып һөйөп, иркәләп-наҙлап алырға ла онотмай. Әгәр ҙә улар яңылыштан ғына ҡоролған "тәртип"те боҙа икән, "яза"-һын да мотлаҡ аласаҡ: батшабикә ике тапҡыр һөйләп тормаясаҡ. Башҡалар ошондай ир тураһында "ҡатынының туфли табаны аҫтына эләккән", тиһә лә, ул үҙ ғаиләһендә татыу һәм тыныс йәшәү өсөн ошонан да унайлыраҡ ысул тапмаясаҡ. Хәйер, ошо ролде ҡабул итергәме, юҡмы, һәр кем тәбиғәттән бирелгән холҡона ярашлы, үҙе хәл итә.

## Шаянбай

Донъя булғас, уйын-көлкөһөҙ булмай. Хатта тормош хәлдәре ауырайып киткәндә лә бер көлөп алһаң, артабан йәшәүе еңеләйеп киткәндәй була. Шулай булғас, көләс йөҙлә, шаян һүҙле кешеләр беҙҙең ҡәҙимгә көнитмешебеҙгә йәм биреп, йәнләндереп тора. Улар һәр көндө йылмайып ҡаршылап, үҙҙәренең бөткөһөҙ энергияһын тирә-яҡҡа сәсә.

Ҡыҙҙар ҙа иң элек егеттәрҙең ҡайһыһы үткерерәк, телсәнерәк, шулар тирәһендә урала. Уҡығандамы, эштә булһынмы, шаян, күңелсәк егеттәр һәр саҡ иғтибар үҙәгендә була. Аулаҡта, ял иткәндә мут егеттәрҙең урыны түрҙән булып, ҡушарлап бейегәндә ҡыҙҙарҙың иң "эре"ләре лә уларҙан баш тартмай. Шулай итеп, шуҡ егеттәр үҙҙәренә көләште уйнап-көлөп кенә таба ла, кейгән ҡамытын шаяра-көлә тартыуын дауам итә. Әлбиттә, ҡатындары уларға артыҡ шашып китергә ирек бирмәй, югиһә, йәш саҡтағы "мутлыҡ"тарын иҫкә төшөрөп, ысҡынып китеүҙәре бар. Шулай ҙа, ҡыйын хәлдәрҙә бөлөнөп ҡалмағас, уларҙың бәләкәй генә "шуҡлыҡ"тарын хәләл ефеттәре ғәфү итеүсән була.

## Ашнаҡсы ир

"Егет йөрәгенә юл уның ашҡаҙаны аша һалына", тип әйтеү бигүк дөрөҫ түгел шикелле. Егеттәрҙең ҡайһыһы аш һайлап, артыҡ иркәләнергә ярата һуң? Дөрөҫөрәге, ниндәй аш тәҡдим итәләр, шуның менән ҡәнәғәт була улар күп осраҡта. Ә ҡатын-ҡыҙ, киреһенсә, бер саҡта ла тик бер төрлө аш менән ҡәнәғәт булмаясаҡ. Шуға бит инде улар китап магазинынан "Кулинария" томдарын ташый, хәтерҙәрендә йөҙәрләгән аш-һыу әҙерләү рецептын һаҡлай. Әгәр һеҙҙең, ир-егеттәр, өҫтәрәк һанап үтелгән мөмкинлектәрегеҙ юҡ икән, ҡыҙҡатын күңелен аш бешереп тә яулап була икәнлеген онотмағыҙ. Был беҙҙең ирҙәр өсөн сәйерерәк ысул инде, әммә ул 100 процентлы гарантия бирәсәк. Ана, үзбәк ирҙәре былау бешерергә кәрәк булһа, ҡатынҡыҙҙы эшкә ҡатыштырмай икән. Был тиккә түгелдер ул. Ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ ошоно һынап ҡарай алаһығыҙ. Иң мөһиме, күҙҙең яуын алып торған, ауыҙ һыуын ағыҙырлыҡ тәмле еҫтәр аңҡып торған өҫтәл әҙерләй алыу кәрәк. Тәүҙә ошоға өлгәшеү мөмкин булмаҫтай тойолһа ла, аш бешереүҙән дә күңеллерәк һәм ләззәтлерәк башҡа эш булмағанын һуңынан аңларһығыҙ. Донъяла иң яҡшы ашнаҡсыларҙың ир затынан булыуын кем белмәй? Ә ҡатынҡыҙ заты тарафынан һеҙҙең ошо һәләтегеҙ үҙе бер батырлыҡҡа тиңләнеп баһаланасаҡ. Шулай итеп, тәмле аш бешерергә өйрәнһәң, көләшле лә булырһың, ә өйләнгәс, хәләл ефетең: "Һай, Хоҙайҙың рәхмәте төшкөрө, минең иремдән дә булдыҡлыраҡ башҡа ир юҡ", - тип, һайрап торасаҡ.

**Бәзри ӘХМӘТОВ.**

---

һаҡланып ҡалған ярсыҡтары, тип һанай. Ғалимдар был халыҡтарҙың боронғо телен һаҡлап алып ҡала алыуының сәбәбен уларҙың Памир тауҙарының әҙәм балаһы үтә алмаҫлыҡ урындарында йәшәүе менән аңлата. Тауҙар араһында бикләнеп йәшәүҙәре арҡаһында улар эрерәк халыҡтарҙың йоғонтоһон бигүк тоймайынса, Совет власына ҡәҙәр килеп етәләр. Совет власы йылдарында уларҙың бөтәһен дә тажик телендә уҡыта башлайҙар һәм үҙҙәренең боронғо телдәрен оноттора яҙалар (быныһы ҡыҫҡа ғына тарихи экскурс).

Башҡорттоң "Урал батыр" тигән боронғо эпосында Хаостан Донъя барлыҡҡа килтереп, уны тәҙәкләндереүсе, тәртипкә һалыусы, ипкә килтереүсе Урал батырҙың исемендә лә шул уҡ "хур", "ур" (ҡояш) тамыры ята. Йәғни, "Урал" һүҙе тәүҙәрәк "Хур (Ур) алп" - "ҡояш батыр" тигәнде аңлатҡан. Донъяла әҙәм балаһы өсөн ҡояш - йәшәү сығанағы булһа, эпоста Урал да - йәшәү сығанағы. Кем эпосты уҡыған, моғайын да, хәтерләйҙер, тик Урал батырҙың ҡылған ғәмәлдәре генә әҙәм балаһына был донъяла хөр йәшәү мөмкинлеген барлыҡҡа килтерә. Әле беҙ "Урал батыр" тип атаған эпос беҙҙең эраға ҡәҙәр, бик боронғо дәүерҙәрҙә ата-бабаларыбыҙҙың күк есемдәренең (йондоҙҙарҙың, ҡояштың, айҙың һ.б.) күктәге хәрәкәте, ваҡыт һәм арауыҡ төшөнсәләре тураһындағы үҙҙәренең ҡараштарын төрлө код һәм символдар аша Урал менән Шүлгәндең сәйәхәте формаһында шиғри тасуирлап, быуындан-быуынға тапшырып килеүенән формалашҡан. Уралдың тереһыу эҙләп йөрөп үткән юлы ҡояштың бер йыл эсендә Ер тирәләй үткән маршруты булһа, Шүлгәндең маршруты - ул Ай маршруты. Был турала мин "Космогонические воззрения древних башкир" тигән китабымда "Урал батыр" эпосын семиотика фәне күҙлегенән тикшереп яҙып сыҡҡайным.

Шулай итеп, әгәр ошо "хур" тигән һүҙҙе "ҡояш" тип аңлатһаҡ, бөтәһе лә үҙ урынына ултыра ла ҡуя. Башҡорт элек-электән ҡояшҡа табынған, ҡояш менән ант иткән. Ҡояшты яратып, ул әле булһа "ҡояш апай" ти. Һылыуҙарға ҡарата "бер бите - ай, бер бите - ҡояш" тигән эпитет-маҡтауҙы фольклор материалдарында йыш осратырға була. Шулай булғас, "хур ҡыҙҙары" тигәнде лә "ҡояш ҡыҙҙары" тип аңлатырға кәрәк, минеңсә. Бөтә донъяға нур бөркөүсе, йылы биреүсе, тере йәндәр өсөн йәшәү сығанағы булараҡ, ҡояш борон-борондан мифологияла матурлыҡ символы һәм эталоны ла булып хеҙмәт иткән. Тора-бара ҡояшты аңлатҡан "хур", "ур" һүҙе төрлө сәбәптәр арҡаһында телебеҙҙә әүҙем ҡулланылыуҙан төшөп ҡалһа ла, "хур ҡыҙҙары" тигән һүҙбәйләнештә, Урал (Ур алп) һүҙендә һаҡланып ҡалған. Шулай итеп, башҡорттоң матур, һылыу ҡыҙҙарға ҡарата "хур ҡыҙҙары" тип әйтеүен хәҙергесә "ҡояш ҡыҙҙары" тип аңларға кәрәктер.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**ғилми хеҙмәткәр.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## ХАНЛЫҠТАР

### 3. Ыҡ (ирәкле) батшалығы

Билдәһеҙ авторҙың XVI быуат аҙағында, XVII быуат башында ижад ителгән "Сыңғыҙнамә" йәки "Дәфтәри Сыңғызнамә" әҫәре (М.Ә. Усманов буйынса) йөкмәткеһендә Сыңғыҙхандың тыуыуы һәм власка килеүе хаҡында һүҙ бара. Ваҡиғалар көньяҡ Уралда бара. Төп геройҙар - Уйшын-Майҡы бей, Юрматы бей, Ҡыпсаҡ бей, Тамъян бей, Мөйтән бей һ.б. Бында башҡорт ырыу яҙмалары, шул иҫәптән табын һәм үҫәргән башҡорттары яҙмалары менән күп оҡшашлыҡтар табабыҙ. Бында шулай уҡ XVII быуат аҙағындағы башҡорт ихтилалдары тураһында һүҙ бара. Ғ.Б. Хөсәйенов "Сыңғыҙнамә" авторының башҡорт кешеһе булыуы ихтималлығы хаҡында белдерә.

Ирәклеләрҙең күп һанлы ырыу-ҡәбиләләре эшмәкәрлеге хаҡында һүҙ алып барып, Ә.З. Әсфәндиәров "Ыҡ" улысының сығанаҡтарҙа Ҡаҙан, Нуғай, Себер, Уса юлдарындағы айырым батшалыҡ булыуын билдәләй. 1730 йылдан Ыҡ улыстарын Ҡаҙан юлы составында ҡарай башлай. Уға Һары Ҡыпсаҡ, Түңгәүер, Әйле, Бөрйән, Гәрәй, Йылан, Ирәкте, Һыуын Сөн Ҡыпсаҡ, Менле, Һеңрән, Табын, Тамъян, Юрмый, Ғәйнә, Ҡырғыҙ, Йәнәй, Тышҡы Йылан улыстары ҡараған. Тап ошо ырыуҙар башҡорттары Ыҡ бассейны составына ҡарағандыр, тип тә фараз итергә була. Этнотерриториаль төркөмгә ҡараған башҡорт ырыуҙары араһында биләрҙәр менән бөрйәндәр башҡаларҙан айырылып торған. 1878 йылда Н.И. Золотницкий биләр, бүләр, бигәр һәм биәр һүҙҙәренең бер тамырҙан сыҡҡанлығы хаҡында әйтә. Бүләр башҡорттары Ыҡ ханлығының боронғо башҡорт ырыуҙары менән тығыҙ бәйләнештә булған ырыуҙары составына ҡарай. Ә бөрйәндәр тамырҙары менән көньяҡ Уралға һәм Урта Азияға барып тоташа. Улар бәшәнәктәр менән бер тамырҙан. XVI быуатта улар Башҡорт иленең көнбайыш сигендә, Ыҡ йылғаһының көнсығышындараҡ йәшәгән. Бөрйәндәр тарафынан Уралда тиҫтәләгән ҡалалар төҙөлә, уларҙың береһе - 1980 йылда табылған Арҡайым ҡалаһы.

Ыҡ батшалығының файҙалы ер аҫты ҡаҙылмаларына бай булған төньяғында барҙылдар йәшәгән. Ғалимдар шуға иғтибар итә: Кама буйында, Барҙым ауылы янында көмөштән эшләнгән әйберҙәр табыла, унда йәшәүселәр үҙҙәрен "барҙы" (бай) тип атай". Тарихи сығанаҡтарҙа әйтелеүенсә, биләрҙәр йылға юлы буйлап Аҡ диңгеҙгә тиклем барып етеп, скандинавия халыҡтары менән аралаша. Б.э.т. IV-III быуаттарҙа барҙыларҙың дәүләт төҙөү буйынса бай тәжрибәһе була. Улар үҙҙәренең ҡандаштары биләрҙәр менән Кама буйында VI-VII быуаттарҙа Биләр дәүләтен барлыҡҡа килтерә. Дәүләттең баш ҡалаһы Европаның иң данлыҡлы ҡалаһына әүерелә. Биләр ҡалаһы ғәрәп йылъяҙмаларында урын алған. Шуны ла әйтергә кәрәк, Биләр Волга буйында түгел, Волганың ҡушылдығы Сиремшәндә урынлашҡан.

(Дауамы бар).

# ҠУПШЫЛЫҠТЫ матурлыҡ мәҙәниәтенә

**Уңышлы булыу серҙәре нимәлә? Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ өсөн. Үҙ эшеңдә булдырыуҙамы, тормош асылыңды табыуҙамы, яҡындарыңа күҙгә күренмәҫ терәк булып йәшәп ятыуҙамы, әллә… Иркә генә наҙлы ҡатын булып, ир-егет мәрхәмәтендә көн итеүҙәме? Был юҫыҡтағы дәлилдәрҙе ни хәтлем күберәк килтерһәң, шул тиклем үк һорауҙар ҙа арта. Сөнки был бик бәхәсле тема. Уңышлы булыу, башҡалар күҙлегенән юғары баһаланыу - бер, шул уңыш эсендә үҙеңде бәхетле тоя алыу-алмау - икенсе мәсьәлә. Ошолар хаҡында һөйләштек милләтебеҙҙең ике уңышлы ҡатын-ҡыҙы менән. Һәр хәлдә, "Модельер мөйөшө" тегеү салоны хужабикәһе Саимә Хәсәнова һәм "ZILI ART" матурлыҡ салоны директоры Зилиә Йәғәфәроваларҙың фекеренә, кәңәштәренә ҡолаҡ һалыу һәр кем өсөн файҙалы булыр һымаҡ.**

**Бөгөнгө халәтегеҙгә килеп еткәнсе оҙон юл үткәнһегеҙ. Әйҙәгеҙ, уҡыусыларыбыҙға аңлайышлы булһын өсөн, бер аҙ шул арауыҡҡа байҡау яһап алайыҡ. Һеҙҙән башлайыҡ, Саимә апай. Һеҙҙең тегенсе һөнәренә ҡыҙыҡһыныу нисек башланды?**

**Саимә Хәсәнова:** Минең ҡартәсәйем тегенсе булды. Уның тегенселек ҡағыҙәләре әле лә күҙ алдымда. Иҙәнгә тауарҙы йәйеп һала ла, бер ниндәй үлсәмһеҙниһеҙ башта күлдәктең итәген, унан түш, арҡа, ең өлөштәрен ҡырҡып ала. Бөтәһен дә күҙ үлсәме менән башҡара. Хәҙер бына шул алымды үҙем дә ҡулланам, туҡыманы магазинда уҡ итәк һәм башҡа өлөштәргә күҙ үлсәме менән бүлгеләп, ниндәй кейемгә күпме кәрәклеген самалай алам.

Өфөгә 1-се интернат-мәктәпкә етенсе класҡа уҡырға килдем. Хеҙмәт дәресендә ҡыҙҙарҙы тегенергә өйрәтәләр ине. Мин был дәрестәрҙе бигерәк ныҡ яраттым. Ҡайһы бер класташ ҡыҙҙарға кейем дә теккеләнем.

Мәктәпте тамамлап, тегенсе булырға ныҡлап хәл итеп, технология институтына уҡырға инергә әҙерләнеп йөрөйөм. Атайым килде лә, медицина институтына барырһың, тине. Мин шаҡ ҡаттым, үҙемде врач итеп күҙ алдына ла килтерә алмай инем. "Юҡ, атай, мин тегенсе булам", - тигәс, "Ғүмер буйы сепрәккә күмелеп ултырырһыңмы инде?" - тип көйәләнеп китте атайым. Кейәүгә сыҡҡанда ла: "Кейәүемә бер генә үтенесем бар: ҡыҙым көн-төн теген машинаһы артында ултырмаһын ине..." - тигән булғайны.

**Шулай итеп, атайығыҙҙың теләгенә ҡаршы торорға ҡыйыулыҡ иткәнһегеҙ һәм бала саҡтағы ҡыҙыҡһыныуығыҙға барыбер тоғро ҡалғанһығыҙ була инде…**

**Саимә Хәсәнова:** Эйе, шулай. Әлбиттә, мин тәүге йылда юғары уҡыу йортона уҡырға инә алманым, һөнәрселек училищеһына барҙым һәм бында ла үҙ стихиямда булдым. Мастерым Роза Әхмәт ҡыҙы бик яҡшы уҡытыусы ине, унан күпкә өйрәндем. Бөтөн ваҡытымды, көсөмдө илһамланып ижад итеүгә һалдым. Уҡыуҙы тамамлағас, училищела уҡытырға ҡалырға өгөтләнеләр. Тик мин риза булманым. Хор йәмғиәтенә эшкә урынлашып, шунда сәхнә костюмдары тегә башланым. Беренсе оло оҫталыҡ мәктәбе үтеү булды был эш урыным. Мин бит әле ул саҡта бөтөнләй йәшмен, әммә оло оҫталар рәтенә ултырталар, ҡатмарлы костюмдарҙы тегергә ышанып тапшыралар ине. Артабан... Артабан иһә, меңдәрсә ҡатын-ҡыҙ яҙмышын ҡабатлап, кейәүгә сыҡтым да, ирем артынан эйәреп, Күгәрсен районына ауылға ҡайтып киттем. Йомағужа ауылының көнкүреш йортона тегенсе булып эшкә урынлаштым. Башта тегенсе, киҫеүсе, унан директор булып эште дауам иттем.

Ҡыҙым Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатына уҡырға ингәс, тағы Өфөгә күсеп килдек. Ул йылдарҙа эш табыуы бик ауыр ине. Унан һуң, ябай ғына ательела эшләге лә килмәй. Ҡыйыулыҡ итеп, Мода йортона барып индем һәм мине киҫеүсе итеп алдылар. Оло бәхет тип һынаным был йортта эшләй башлауымды. Башымды баҫып, һәр оҫтаның ҡулына төбәлеп, һәр ваҡ-төйәккә өйрәнергә тырыштым. Ваҡыт үтеү менән мине ижади лабораторияның етәксеһе итеп ҡуйҙылар һәм был данлы коллективта Мода йорто ябылғанға тиклем эшләнем.

**Зилиә Рәфҡәт ҡыҙы ла үткәндер бындай һынау һәм тәжрибә туплау юлдарын?**

**Зилиә Йәғәфәрова:** Беҙҙең быуын кешеләренә тотош һынауҙарҙан торған бик ҡыҙыҡлы осор тура килде лә инде ул. Бала саҡта бөтөн ауыл балалары кеүек үк эшләп, сыныҒып үҫтек, әлбиттә. Ә шулай ҙа студент ваҡытыбыҙға тура килгән илдәге иҡтисади һәм социаль үҙгәрештәр беҙҙән бөтөнләй икенсе төрлө холоҡ үҙенсәлектәре, түҙемлек, егәрлелек, тәүәккәллек талап итте. Ғәҙәти генә, моңһоҙ ғына йәшәп ятҡанда ҡапыл болғаныштар башланды бит. Беҙгә, йәштәргә, үҙаллы тормошҡа үтеп китә торған ишектәр "шап" итеп ябылды ла ҡуйҙы. Шул ваҡыт йәшәү, "тере ҡалыу" теләге көслө булғандар алға ынтылды, ә күптәр ошо буталсыҡлыҡта үҙ-үҙен таба алмай аҙашып ҡалды.

Ул осорҙа мин Башҡорт дәүләт медицина институты студенты, иптәшем буласаҡ иҡтисадсы ине. Көн күреү өсөн иҙәнен дә йыуҙыҡ, башҡа ҡара эштәрҙе лә башҡарҙыҡ, оҙон-оҙон сираттарҙа ла баҫып торҙоҡ, кәрәкте юлланыҡ, таптыҡ, бар иттек. Хатта ҡаракүл тунды боҙоп, шунан шапкалар тегеп һатырға ла тура килде. Кемдер беҙгә нимәнелер алып килеп бирер, йәш ғаилә, тип йәлләр, атай-әсәй үҙ хәстәренән мәхрүм итмәҫ, тигән уй башыбыҙға ла инеп сыҡманы. Шул мәлдәр тап беҙҙең сынығыу мәктәбе булды ла инде.

**Бөтөн бөйөк эштәр ҙә ниндәйҙер сәбәптән башлана бит. Шуның һымаҡ, һеҙҙең яҙмышҡа саҡырыу ташлаған ниндәйҙер этәргес көс, сәбәп тә булғандыр, моғайын…**

**Саимә Хәсәнова:** Әлбиттә, балаларым алдындағы яуаплылыҡ, уларҙы фатирлы итеү теләге әлеге эшкә тотонорға мәжбүр итеүсе сәбәп булды. Шулай мин тәҙрә ҡорғандары тегергә өйрәнеп алдым. Күпләп заказдар ҡабул итеп, ошо эшкә арыуыҡ көсөмдө һәм ваҡытымды сарыф итеп, Өфөлә фатирлы булдыҡ. Тик был кәсептән бик арыным һәм тора-бара уны ҡалдырҙым. Балалар үҫте, тормош күпкә еңеләйҙе, Аллаға шөкөр. Тик буш ултырғы килмәй, күңел ниндәйҙер ижад, илһам бирер хеҙмәт көҫәй һәм беҙ балалар менән кәңәшләшеп, "Модельер мөйөшө" тигән салон асып ебәрҙек. Кәрәкле ҡорамалдар, йыһаздар йыйып, тегенселәр һайлап алып, эш башланыҡ...

**Зилиә Йәғәфәрова:** Уҡыуҙы тамамлап, Мәләүез ҡалаһына эшкә барғас, миңә, провизорға, эш урыны булмай сыҡты. Ул саҡта бәләкәй ҡалаларҙа бер-ике генә дәүләт аптекаһы эшләй торғайны. Шул саҡта шәхси аптека асып ҡарау ниәте менән яна башланым. Беҙ ирем менән уйлай ҙа, башҡарып та ҡуя торған кешеләрбеҙ. Күпмелер ваҡыт эсендә был планды тормошҡа ашырып та ҡуйҙыҡ. Ғәҙәттә, идея минеке, ә ирем минең ошо идеямды тормошҡа ашырыуҙа төп терәгем. Ул ирҙәрсә, шул уҡ ваҡытта профессионалдарса (һөнәре буйынса иҡтисадсы ла, юрист та) кәңәштәр, йүнәлештәр бирә, документтарҙы юлға һала. Ә мин кәсептең тауар, сауҙа кеүек өлөштәрен үҙ өҫтөмә алам.

Иремде Өфөгә эшкә алғайнылар, беҙгә лә уның артынан эйәрергә тура килде. Минең инде кемдәргәлер эшләү теләге булманы. Башта буфет асып ҡараным. Унда төрлө ҡамыр аштары, сәйгә ҡушып ҡабыр тәғәмдәр бешереп һаттыҡ. Эште дөрөҫ ҡуя белгәнбеҙҙер, тим, сауҙабыҙ яйлы ғына алға тәгәрәне. Эште контролдә тотоу һәм идара итеү генә кәрәк була башланы. Тора-бара был ғына аҙ тойолдо. Әүҙем тормош алып барыу, өҙлөкһөҙ ниндәйҙер үсеш кисереү теләге тынғы бирмәне. Шул эҙләнеү юлында матурлыҡ салоны асып ҡарау теләге тыуҙы ла инде. Бер һеңлем оҫта парикмахер, ул үҙенең ярҙамын тәҡдим итте. Ғаиләбеҙ менән тағы бер кәңәшмә яһап алдыҡ та, тотондоҡ та киттек. Әлбиттә, был минең өсөн яңы бер донъя булды. Әммә бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс донъя. Хәҙер инде бына дүрт йыл "ZILI ART" тип аталған матурлыҡ салоным клиенттарын ҡабул итә.

**Зилиә Рәфҡәт ҡыҙы, һеҙ бит психолог һөнәрен дә үҙләштергәнһегеҙ. Был һеҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙарҙың бер төрөме, әллә эшмәкәрлек өлкәһендә тағы үҙгәрештәр көтөләме?**

**Зилиә Йәғәфәрова:** Эйе, ҡырҡты ашатлағанда яңы һөнәргә уҡып алдым. Был да минең күңел талабым булды. Бер уйлағанда, дүрт бала әсәһе булып, уларҙы инде аяҡҡа баҫтырып килгәндә, бизнес донъяһында ла ниндәйҙер үҙ юлдарыңды тапҡанда, бындай белем кәрәк тә түгел кеүек. Әммә бизнесты алға алып барыу, кешеләр менән аралашыу, улар менән ыңғай мөнәсәбәт булдырыу, уларҙың эске донъяһын аңлау өсөн был белемгә ихтыяж барлығын аңланым бер мәл. Унан һуң, психология фәне, бигерәк тә кешеләрҙе һәм донъяны ошо күҙлектән өйрәнеү миңә бала саҡтан яҡын ине. Дөрөҫөрәге, был белем, йәғни фекерләү, мөнәсәбәттәр булдырыу, аралашыу кеүек барыбыҙға ла хас сифаттар беҙгә тыумыштан бирелә бит инде ул. Шунлыҡтан, минең психология фәнен өйрәнеүем үҙемдең тәбиғи булмышыма бөтөн проблемалары һәм талаптары менән әлеге замананы ла һыйҙырыу, бөтөнләктө тоторға тырышыу һымағыраҡ ҡабул ителергә тейештер, тим.

**Бөгөн һатыуҙа тауарҙарға ҡытлыҡ юҡ, йәнең теләгән күлдәкте лә, биҙәнеү-яһаныу әйберҙәрен дә, башҡаһын да табып була. Шул уҡ ваҡытта һеҙ ҙә клиенттарға мохтажлыҡ кисермәйһегеҙ. Был күренеш нисек аңлатыла, әллә заказ менән кейем тектереүҙең башҡа серҙәре бармы ла, салонға килеп матурланыу әһәмиәтлерәкме?**

**Саимә Хәсәнова:** Кейем тектерергә яратыусылар - улар үҙҙәрен шәхес итеп тоя белеүселәр, тип уйлайым мин. Улар башҡаларға оҡшарға тырышмай, нимәнендер тик үҙҙәренә генә арнап яратылыуын баһалай белә. Улар йөҙҙәрсә, меңдәрсә кешегә тәғәйенләнгәндә эске донъяһы менән ҡабул итә алмай һәм интуитив рәүештә быны ҡайһы бер ғәҙәттәрендә, мәҫәлән, шәхсән кейем тектереүҙә сағылдыра. Улар, ғәҙәттә, тормошта ла



***САИМӘ ХӘСӘНОВА:***

*Кейем тектерергә яратыусылар - улар үҙҙәрен шәхес итеп тоя белеүселәр, тип уйлайым мин. Улар башҡаларға оҡшарға тырышмай, нимәнендер тик үҙҙәренә генә арнап яратылыуын баһалай белә. Улар йөҙҙәрсә, меңдәрсә кешегә тәғәйенләнгәндә эске донъяһы менән ҡабул итә алмай һәм интуитив рәүештә быны ҡайһы бер ғәҙәттәрендә, мәҫәлән, шәхсән кейем тектереүҙә сағылдыра.*

***✓ Ҡыҙҙарымды ла шуға өйрәтәм. Иң башта ғаиләгеҙгә, ирегеҙгә, балаларығыҙға булығыҙ, унан һуң ғына яратҡан эшегеҙ менән шөғөлләнегеҙ, тим. Кеше, ғөмүмән, үҙенә оҡшаған эште генә башҡарырға тейеш.***

# ҮҘ ИТКӘНДӘР...

**йөҙөн бора**

үҙ фекерҙәре, ҡараштары, үҙ юлы булған, шул нигеҙҙә ниндәйҙер үрҙәр, мөмкинлектәр яулаған һәм йәмғиәттә үҙҙәрен таныта белгән кешеләр. Лидерҙар, тип әйтер инем мин улар тураһында.

**Зилиә Йәғәфәрова:** Нисек кенә булмаһын, тормош алға бара, уға тейешле үҙгәрештәр, яңылыктар индерелә тора һәм был тәбиғи ҙә. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа, ниһайәт, матурлыҡ мәҙәниәтенә йөҙ бора. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы боронборондан ҡупшылыҡты үҙ иткән. Ҡашҡа һөрмә тартыу, битте ағартыу, сикәләрҙе алһыулатыу, хушбуйҙы алыштырыусы майҙар, үләндәр ҡулланыу - уның айырылғыһыҙ ғәҙәт-ҡылығы. Ә инде милли кейемендәге биҙәүестәрҙе әйтеп тораһы ла түгел. Совет осоро ҡатын-ҡыҙҙы енес булараҡ юҡ итеп, уны ир-егет менән тиң тәбиғәтле яһап ҡуйҙы. Ул биҙәнеп-төҙәнмәй, сөнки "елбәгәй түгел", матур кейенмәй, сөнки "мещанка" булғыһы килмәй, үҙен йомшаҡ, көсһеҙ һәм ярҙамға мохтаж итеп күрһәтмәй, сөнки ул - коммунист, комсомол һ.б. Ошондай сәйәсәт хөкөм һөргән йәмғиәттә беҙ тәбиғи нәфислекте юғалтып, ирҙәр менән бер массаға әйләндек. Шул арҡала ҡатын-ҡыҙҙарҙың байтағы ғаилә ҡороуҙан, әсәй булыуҙан мәхрүм ҡалды, сирлегә әйләнде... Тәбиғи ритмдан яҙыу арҡаһында ҡатын-ҡыҙ энергияһын юҡ кимәлендә кәметте. Бөгөн иһә, шөкөр, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ яйлап-яйлап үҙҙәрен нескә, наҙлы итеп тойорға өйрәнә бара. Әлбиттә, косметиканы һатып алып ҡулланып та була. Әммә ваҡыт-ваҡыты менән махсус салонда булып, табип-косметолог, визажист, парикмахер, массажист һымаҡ оҫталар ҡулында тәрбиәләнеп алыу - ул бөтөнләй икенсе донъя.

▸ **Һеҙгә башлыса ҡатын-ҡыҙҙар мөрәжәғәт итә. Ләкин бөтәһе лә матурлыҡ салонына, йә ательеға йөрөп өйрәнмәгән. Мәҫәлән, һеҙгә беренсе тапҡыр мөрәжәғәт итеүсе үҙенә ниндәй прическа йә күлдәк өлгөһө килешә икәнен дә белмәҫкә мөмкин. Ундайҙарға һеҙ иң беренсе нимә тәҡдим итәһегеҙ?**

**Саимә Хәсәнова:** Мин иң беренсе был ҡатындың (йәки клиенттың) эске донъяһын тойоп алырға тырышам. Ниндәй кеше ул? Кейемен ниндәйҙер нигеҙле талап менән һайлаймы? Әллә башҡаларҙа булмаған матур күлдәк кенә теләйме? Айырымсыҡ ҡына төҫмөрләүе булмаһа, мин уға төрлө өлгөләр күрһәтеп, уның комментарийҙарын тыңлайым, шул бәйләнеш аша ла уның аң кимәлен, ҡыҙыҡһыныуҙарын, ҡарашын самаларға була. Унан, үҙемдең күҙәтеүҙәрҙән сығып, уға тәҡдимдәр яһайым, буй-һынына, йөшенә, статусына тап килерҙәй, уның ниндәйҙер матур яҡтарын һыҙыҡ өҫтөнә алырҙай, етешһеҙлектәрен йәшерерҙәй моделдәр һайларға тырышам. Шул уҡ ваҡытта клиенттың ижади булыуы ла ярҙамға килә. Кеше бит кейеме менән эске донъяһын сағылдыра. Был уның эске талаптары. Шунлыҡтан, мин клиенттарым менән эшләргә, уларҙы өйрәнергә, бергәләп ижад итергә яратам.

**Зилиә Йәғәфәрова:** Салонда хеҙмәтләндереүсе коллективыма бер нәмәне ҡат-ҡат ҡабатлайым: бер ваҡытта ла клиентты өҫ-башына, кәйефенә йәки башҡа тышҡы күренештәренә ҡарап ҡабул итмәгеҙ, тием. Бәлки, ул ҡатын бик арығандыр, проблемалары быуғандыр һәм ул бында саҡ ҡына булһа ла ял итеп алыу өсөн килгәндер. Бәлки, ул бер матурланып алыуға әллә күпме ваҡыт аҡса йыйғандыр һәм һуңғы аҡсаһына килгәндер. Бәлки, ул ошонда килеп, үҙенә яҡшы мөнәсәбәт күрергә, иғтибар тойорға өмөт итәлер. Сәбәптәре йөҙ төрлө булырға мөмкин, әммә ул бит ошонда килгән, тимәк, ул үҙен хөрмәт итә белгән кеше. Шул клиент беҙҙә рухын үҫтереп, үҙенең үҙенсәлекле икәнлегенә инанып, донъяға ҡарашы яҡтырып һәм, әлбиттә, сифатлы хеҙмәтләндерелеп сығырға тейеш.

▸ **Ә шулай ҙа ҡайһылыр өлкәлә уңыш яуларлыҡ булып үҫешә алыр өсөн ниндәй сифаттарҙы алға ҡуйырға кәрәк икән?**

***ЗИЛИӘ ЙӘҒӘФӘРОВА:***

*Совет осоро ҡатын-ҡыҙҙы енес булараҡ юҡ итеп, уны ир-егет менән тиң тәбиғәтле яһап ҡуйҙы. Тәбиғи ритмдан яҙыу арҡаһында ҡатын-ҡыҙ энергияһын юҡ кимәлендә кәметте. Бөгөн иһә, шөкөр, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ яйлап-яйлап үҙҙәрен нескә, наҙлы итеп тойорға өйрәнә бара.*



**Саимә Хәсәнова:** Оҫта белгестән эшкә өйрәнергә теләгәндә уның ауыҙынан сыҡҡан һәр файҙалы кәңәште йоторға, күңеленә һеңдерә барырға тырышырға кәрәк. Һәр ваҡыт үҙеңдең ниндәй маҡсатҡа ынтылыуыңды иҫеңдә тотоу мөһим. Ниндәйҙер оҫталыҡҡа өйрәнеү - ул иң башта характерҙы сыныҡтырыу. Мин заманында, тегеү өлкәһендәге бар серҙәрҙе лә беләм, тип уйлағанда ла, ҡайһы бер оҫталар ҡулында баш күтәрмәй ултырып эшләнем, уларҙың үҙемдән күпкә йәш икәнен белгәндә лә, кеселекле булырға тырыштым. Сөнки мин үҙем белмәгән, ә ул белгәнде белергә теләй инем. Һәм шул оҫталыҡтарҙы үҙләштергәс, үҙемдең тағы ла оҫтараҡ булып китәсәгем тураһында уйлай инем. Бизнес эшен алға алып барыуға ла, клиенттарҙы йәлеп итеүгә лә, уларҙың психологияһын өйрәнеүгә лә мин кемдәрҙәндер өйрәндем. Өйрәнгәндә иң беренсе эске теләк, унан инде тыңлаусанлыҡ, түҙемлек зарур.

**Зилиә Йәғәфәрова:** Коллективҡа килгән һәр яңы кешегә мин эш тәртиптәрен һәм талаптарын аңлатам һәм күпмелер ваҡыт уның ынтылышын күҙәтәм. Барыбыҙ ҙа ябай кешеләрбеҙ, һәр беребеҙҙең үҙ ғәҙәте, етешһеҙлектәре, ҡылыҡтары бар, уныһы аңлашыла. Әммә эшләргә теләгән һәм башҡарғанынан ләззәт алғандар шундуҡ һиҙелә лә. Эш хаҡы өсөн генә йөрөп, үҙен эшләргә мәжбүр иткән менән хеҙмәтенә ижади ҡараған кеше айырыла бит ул. Минең коллективта эшенә ижади ҡарағандар ғына эшләй.

Психология буйынса кешеләр дүрт типҡа бүленә. Уларҙы ҡыҙыл, күк, йәшел һәм һары төҫтәрҙә күрһәтәләр. Мәҫәлән, ҡыҙылдар - лидер, күктәр - ойоштороусы, бик әүҙем кешеләр, йәшелдәр - аналитиктар, һарылар - башҡарыусылар. Мин әле дөйөм итеп кенә алдым, уларҙың һәр береһенең ентекле үҙенсәлеге бар. Быны ошо дүрт тип та, тырышҡанда, уңыш ҡаҙана ала, бары тик уларҙың һәр береһенең үҙ үҫеш юлы. Шунлыҡтан, бары тик шундай характерлы кешеләр генә уңышҡа юлыға ала, тигән ҡалыпты бөтөнләй юйып ташларға була. Үҙ эшен белгән, уға ижади ҡараған һәм алдына маҡсат ҡуйып ынтылғандарҙың барыһы ла уңышҡа өлгәшә ала. Ниндәйҙер эш асып, кеше яллап эшләтеп кенә алға барып булмай, был өлкәне башта үҙең аңларға һәм тулыһынса ҡабул итергә тейешһең. Кире осраҡта, көйөп-янып, хеҙмәткәрҙәреңде гәйепләп, унда-бында аҡса түгеп, һаулығыңды юғалтып ҡалырға мөмкинһең. Башта эште үҙең бел, үҙең эшләп ҡара, шунан башҡаны өйрәт. Тәртибе шулай.

▸ **Үҙ эшегеҙҙе асҡанда хөкүмәттән берәй ярҙам алдығыҙмы, ниндәйҙер программаларҙан файҙаландығыҙмы?**

**Зилиә Йәғәфәрова:** Беҙ берәүҙән дә бер нәмә лә өмөт итеп өйрәнмәгәнбеҙ. Барыһын да үҙебеҙ башҡарырға күнеккәнбеҙ. Шунлыҡтан, ярҙам һорап та йөрөмәнек, ниндәйҙер программабыҙ ҙа булманы. Һәм балаларҙы ла шулай өйрәтәбеҙ.

**Саимә Хәсәнова:** Үҙ көсөң, йәғни эске көсөң булмаһа, ойошторасаҡ коллективыңды утҡа ташларға ярамай. Һин үҙеңә генә ышанырға, ниндәй эште булдыра алырыңды аныҡ ҡына белергә тейешһең. Мин дә, Зилиәләр кеүек үк, хөкүмәттән дә, башҡаларҙан да ярҙам һорап йөрөмәнем. Әлбиттә, рухи ярҙам, рухи терәк бик кәрәк, тик башҡаһына өмөт итмәйем...

▸ **Ниндәй генә уңышлы, көслө, аҡыллы булһағыҙ ҙа, һеҙ ҡатын-ҡыҙҙар, әсәйҙәр, өләсәйҙәр бит әле. Һеҙҙең был аҡса табыу шөғөлөгөҙ тәбиғәткә ҡаршы килеү түгелме - аҡсаны бит ирҙәр табырға бурыслы...**

**Зилиә Йәғәфәрова:** Мин был фекер менән тулыһынса килешәм. Диндә лә шулай тиелә. Ғаилә өсөн бөтөн матди яуаплылыҡ ир кеше иненә ята. Ә ҡатын кеше уның ярҙамсыһы булып, балаларҙы тәрбиәләп, өйҙә таҙалыҡ, бөтөнлөк булдырып торорға ғына тейеш. Ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләнән тыш эшкә күберәк ваҡыт бүлеүе дөрөҫ түгел. Әгәр ул холҡо менән теремек, уйлап табыуға әүәҫ, нимәгәләр тотоноп китеүгә ҡыйыу, барыһына ла өлгөрә ала икән - уныһы хуп, әлбиттә. Ләкин шулай булғанда ла ҡатын-ҡыҙ ваҡытын ғаиләһенә күберәк бүлергә тейеш. Мин был хәҡиҡәтте динебеҙҙе, ҡатын-ҡыҙ психологияһын өйрәнеп, күпмелер ғүмер йәшәгәс кенә аңланым. Һәм хәҙер ҡыҙҙарымды ла шуға өйрәтәм. Иң башта ғаиләгеҙгә, ирегеҙгә, балаларығыҙға булығыҙ, унан һуң ғына яратҡан эшегеҙ менән шөғөлләнегеҙ, тим. Кеше, ғөмүмән, үҙенә оҡшаған эште генә башҡарырға тейеш. Эш урынында үҙеңде хөр тоймайһың икән - ыҙалама. Был шулай уҡ тормош иптәше итеп һайлаған кешеңә лә, кейемеңә лә, үҙеңде уратып алған мөхитеңә лә ҡағыла. Әлбиттә, барлыҡҡа ла ынтылырға, һәр ваҡыт үҫеш юлында булырға кәрәк, әммә балаларҙы аша атлап түгел.

Бөгөн ғаиләләрҙәге арыған, йонсоған ҡатындарҙың хатаһы - ир-егеткә һалынған яуаплылыҡты үҙ иңдәренә йөкмәп маташыуҙан ул. Хатта был йөккә көсө етеп, үҙенең ҡатын-ҡыҙ йөгөн дә урын-еренә еткереп үтәгәндә лә, уның күңеле нурһыҙ буласаҡ. Ул үҙен, башҡаларҙы, тормошто ярата белмәйәсәк. Шунлыҡтан, ниндәйҙер һөнәр эйәһе, үҙаллы шәхес итеп формалаштырырҙан алда, ҡыҙҙарыбыҙ нәфис ҡыҙ бала итеп, киләсәктә ир ҡатыны һәм әсәй буласағын, ярата һәм яраттыра белеүсе гүзәл зат икәнен аңлатып өйрәтәйек.

**Саимә Хәсәнова:** Әлбиттә, Зилиәнең әйткәндәре менән тулыһынса килешәм, әммә көслө ир иңен тоймауҙан мәхрүм булған ҡатын-ҡыҙға ла йәшәргә кәрәк бит әле. Йәшәү өсөн, балаларҙы лайыҡлы тәрбиәләү өсөн эшләгән ҡатын-ҡыҙҙар бихисап бит инде тормошобоҙҙа. Әйткәнемсә, мин үҙем дә шундайҙарҙан булдым. Әммә һәр ваҡыт күңелемдә ижад осҡоно йәшәне. Ижад итмәһәм, мин һыуһыҙ гөл кеүек ҡороп ҡаласаҡмын һымаҡ ине. Һәр ҡатын-ҡыҙға ниндәйҙер һәләт һалынған бит. Кемдер аш-һыуға оҫта, кемдер һүрәт төшөрә, кемдер уҡырға ярата. Ҡатын-ҡыҙ һәм әсәлек вазифаһынан тыш, үҙеңдең эске донъяңды ла туҡландырып тормаһаң, һин әсәй һәм ҡатын-ҡыҙ булараҡ та һайығаһыңдыр, тип уйлайым. Һин эргәңдәгеләргә үҙеңдең бай эске донъяң менән генә ҡыҙыҡлының икәненә иманым камил. Мин балаларымды ошолай тынғыһыҙ ижади эҙләнеүҙә булыуым, маҡсатлы йәшәүем менән дә тәрбиәләгәнмендер, тип уйлайым...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшеү барышында мин был ҡатын-ҡыҙҙарҙың уңышлы булыу сере уларҙың тырышлығында, һәләтендә, ҡыйыулығында ғына түгел, ә донъяны ҡабул итә һәм унан үҙҙәренә кәрәкле яҡшылыҡты, матурлыҡты, изгелекте эҙләп таба белеүҙәрендә, тигән фекергә килдем. Сөнки тормоштоң яҡшы яҡтарын күрә белеү генә кешене шулай рухи яҡтан үҫтерә, йәшәйештә дөрөҫ тулҡындарға көйләй, үҙең һәм эргә-тирәләгеләрең менән гармония булдыралыр.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

**"Холоҡ яҙмышты билдәләй" тигән һүҙбәйләнештең ҡоро тезис ҡына булмауын йәшәй-йәшәй бар тулылығында аңлай барам кеүек. Ысынлап та, кешенең яҙмышы, асылда, уның холҡона бәйле. Холҡоң ниндәй булһа, яҙмышың шундай. Тәҡдир - Аллаһы Тәғәләнеке, уны үҙгәртеп булмай, ә инде кешенең үҙенән торғаны - яҙмышы, йәғни үҙе яҙғаны. Шул уҡ ваҡытта, әгәр ҙә кеше яҙмышын үҙе яҙыу йәғни үҙенсә йәшәү мөмкинлегенән мәхрүм ителгән саҡта, нимә эшләргә тейеш? Был осраҡта ул тәҡдирен ҡабул итергә тейеш булып сыға түгелме?**

# "ИНСЕБИКӘ СИНДРОМЫ"...

## бәрәкәткә лә, һәләкәткә лә алып килә



### Аллаһ юлындағы Йәнтүрә ҡатыны

Тарихи аспектта ҡарағанда, үткән быуаттарҙа ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙар араһында хоҡуҡтар тигеҙ бүленмәгән саҡта ир-ат үҙ урынында, ҡатын-ҡыҙ үҙ урынында булған. Шул уҡ ваҡытта башҡорт йәмғәтселегендә, мәҫәлән, ир-аттың ҡатын-ҡыҙҙы иҙеү, түбәнһетеү осраҡтары булмаған тиерлек. Совет осороноң һуғышсан атеизмы идеологияһы ғына был фекерҙең киреһен үткәреп маташты, әммә ул ижтимағи ҡоролоштоң үҙе менән бергә юҡҡа сыҡты. Муллаларҙан, дин әһелдәренән көләр өсөн генә уйлап сығарылды был дәлил: тик Октябрь революцияһы ғына ҡатын-ҡыҙға ирек, азатлыҡ алып килде, тигәнде иҫбатлар өсөн.

Әммә башҡа йөкмәткеле тарихи сығанаҡтар, әҙәби йылъяҙмалар, хикәйәттәр ҙә бар бит әле. Миҫалға "Йәнтүрә хикәйәһе"н генә алайыҡ. Башҡорт яугиры Йәнтүрәнең ҡатыны иренең артынан эйәреп, француз яуына бара, уның менән бергә яуға инә, хатта французарға әсиргә эләккәс, уны ҡотҡара ла. Әлбиттә, "Йәнтүрә хикәйәһе"н икенсе милләт вәкиле, крайҙы өйрәнеүсе урыҫ яҙыусыһы Василий Зефиров 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан Йәнтүрә исемле ҡарттан яҙып алған. Шуға күрәлерме, ҡатындың ире артынан яуҙа эйәреп йөрөүе уҡыусылар өсөн, нисектер, әрһеҙлек тә булып тойолғандыр. Яҙмала сатирик нота ла өҫтөнлөк итә. Ғөмүмән, ире менән бергә яуҙа йөрөгән башҡорт ҡатындары күп булғанмы? Йәнтүрәнең ҡатыны ни өсөн ире менән яуға барырға ҡарар иткән? Ни өсөн Йәнтүрә был хәлгә юл ҡуйған? Ошо һорауҙарға яуаптар эҙләп ҡарайыҡ.

Бәлки, ҡайһы бер сығанаҡтарҙа был хаҡта мәғлүмәт барҙыр, әммә мин шәхсән ире артынан һуғышта эйәреп йөрөүсе ҡатындар хаҡында "Йәнтүрә хикәйәһе"нән башҡа яҙмаларға тап булманым. Ошо мәҡәләне уҡыусылар былдай мәғлүмәткә эйә булһа, уртаҡлашһын ине. Шулай ҙа изге "Ҡөрьән" китабының "Ән-Ниса" сүрәһендәге түбәндәге аяттарға күҙ һалайыҡ әле: "...Эй, һеҙ, иманлы кешеләр! Һаҡ булығыҙ, (һуғышҡа) төркөмләшеп йәки бөтәгеҙ бергәләшеп барығыҙ. Һеҙҙең арала мотлаҡ артта ҡалған кеше бар. Һеҙ бәләгә ҡалғанда ул: "Һеҙҙең арала мине шаһит (Аллаһ юлында ҡорбан) итмәй. Аллаһ миңә яҡшылыҡ күрһәтте," - ти. Ә Аллаһтан һеҙгә файҙа тейһә, арағыҙҙа бөтөнләй яҡынлыҡ булмаған кеүек, ул:"Их, һеҙҙең менән бергә булһам, мин дә уңышҡа өлгәшкән булыр инем!" - ти. Аллаһ юлында әхирәтте донъялыҡтан артыҡ күргән кешеләр һуғышһын. Аллаһ юлында һуғышып үлгән йәки еңгән кешегә Беҙ оло бүләк бирербеҙ. Нишләп һеҙ Аллаһ юлы өсөн һәм шулай уҡ: "Я, Раббым! Залимдар йәшәгән был ауылдан беҙҙе сығар, беҙгә һаҡсы, ярҙамсы бир!" - тигән хәлһеҙ ирҙәр, ҡатындар, балалар өсөн һуғышмайһығыҙ? Иманға килгән кешеләр Аллаһ юлында һуғыша, ә кафырҙар - тағут юлында..." (71-76 аяттар).

Ошо юлдарҙы уҡығандан һуң Йәнтүрәнең ҡатынына ҡарата мөнәсәбәт бөтөнләй үҙгәрә. Парижды яулағандан һуң урыҫ армияһы ҡаланы талаған, яндырған, көсләгән саҡта, урамдарға ултырып, намаҙ уҡыған йәнтүрәләрҙең ҡатындары ирҙәре артынан эйәреп йөрөһә лә, асылда, Аллаһ юлында булғандары көн кеүек асыҡ. Василий Зефиров бында яугир башҡорттоң тотҡан дине, ниндәй иманға тоғро булыуы хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәй. Икенсенән, үҙенең артынан хатта шундай яуға эйәреп барырға рөхсәт ителгәс, башҡорт йәмғәтселегендәге ҡатын-ҡыҙҙың ниндәй хоҡуҡтарға эйә булғанлығы һүҙһеҙ ҙә аңлашыла: тимәк, атай-олатайҙарыбыҙ динле булған, "Ҡөрьән"дең юғарыла килтерелгән сүрәһендә әйтелгәнсә, "һуғышҡа төркөмләшеп, йәки бөтәһе бергәләшеп йөрөгән..." (бында ир-аттар хаҡында ғына әйтелмәй). Ҡыҫҡаһы, Йәнтүрәнең ҡатынының ире артынан эйәреп яуҙа йөрөүен тик дини күҙлектән генә ҡарап нигеҙләп аңлатып булалыр тип иҫәпләйем. Йәнтүрә ҡатыны ирен яраткан өсөн генә түгел, Аллаһты әҙәләп һөйгәне өсөн дә французарға ҡаршы ғазауат иғлан ителгән яуҙа йөрөгән. Артабан ниндәйҙер дәлилдәр килтереү артыҡтыр тип иҫәпләйем.

### Саян ниңә үҙен саға?

Барыбыҙға ла яҡшы таныш булған тағы ла бер тарихи ваҡиға. Ағалары көслөп ҡарт байға бирергә иткәс, быға риза булмаған Инсебикә исемле һылыу Ағиҙел ярындағы ҡаянан һикергән, тиҙәр. Уның һөйөшөп йөрөгән егете лә булған. Уға яратҡан кешеһе менән ҡауышырға яҙмай, шуға күрә ҡыҙ үлемде һайлай. Исеме ҡаяға бирелгәс, моғайын да, был легендала тарихи ерлек барҙыр.

Инсебикә ҡаяһы Бөрйән районында урынлашҡан. Ҡыҙ исемендәге ҡаяға ҡарап, хәҙерге йәштәр мәғрүр ҡаяны Инсебикәнең ғорурлығына, батырлығына, мөхәббәт тойғоһоноң иң көслө, мөҡәддәс мәңгелек тойғо булыуына тиңләй. Урын-ерГә исем биреләү факты буйынса ҡарағанда, Инсебикә ҡаяны, ысынлап та, иғтибарға лайыҡлы урын. Әммә, Инсебикәне үҙ-үҙен үлтереүгә килтергән сәбәп һәм холоҡ юҫығынан ҡарағанда, хәҙерге заман күҙлегенән беҙ уны аҡлай алабыҙмы һуң? Үҙенең күп һандағы туғандарын, һөйгән егетен ҡайғыға һалып, Хоҙай биргән ғүмеренән үҙе теләп баш тартырға тейеш инеме һуң Инсебикә? Беҙ уның был аҙымын аңлай һәм ҡыҙҙы күнелебеҙҙән генә аҡлай алған хәлдә лә, ошо күренеште "Ғорурлыҡҡа һәйкәл", "Мөхәббәт - иң көслө тойғо", "Яҙмышҡа баш эймәү" йә "Батырлыҡ" тип атай алабыҙмы? Юҡ, әлбиттә. Инсебикәне йолаға буйһонорға теләмәүсе, ата-әсәһе, өлкән туғандары ихтыярына ҡаршы барыусы, Аллаһы Тәғәләне инҡар итеүсе ҡыҙ тип тә атай алабыҙ бит. Ә бит Хаҡ Тәғәлә ҡыҙҙы шул тиклем һөйгән, яҡын күргән, шуның өсөн дә һынауҙарҙың иң ауырын уға биргән.

Әрмелә үҙем шаһиты булған бер хәл хаҡында күп яҙғаным булды. Ҡабатлайым. Беҙ, һалдаттар, үҙебеҙсә тәжрибә үткәреү маҡсатында көньяҡтың эҫе ҡомо өҫтөндә йөрөгән саяндарҙы уратып, түңәрәкләп бензин йә солярка һибәбеҙ ҙә, ут төртәбеҙ. Шул саҡ саян урталыҡта ҡапыл туҡталып ҡала. Алан-йолан ҡарана, тегеләй-былай итә лә, йә утҡа ташланып һәләк була, йә үҙ-үҙен сағып үлтерә. Юҡ, саянға утта янып үлеү һәләкәте һис тә янамай. Ул ҡулсалағы яғыулыҡ янып бөткәнсе, 4-5 минут самаһы урталыҡта көтөп торһа, йәғни быға сабырлығы етһә, ҡотолоп та ҡалыр ине...

Ошо саяндар менән, ирекһеҙҙән, Инсебикәне сағыштырҙым. Инсебикә лә, ҡаянан һикерер алдынан 4-5 минут туҡтап ҡалып, ата-әсәһен, туғандарын, һөйгән егетен иҫенә төшөрһә, был һәләкәткә барыр инеме икән? Юҡтыр, тием. Сөнки яратмаған кешенә кейәүгә барыуға ҡарағанда, донъялыҡ менән баҡыйлыҡ аралығын үтеү, оло ҡайғыға батҡан яҡындарынды донъялыҡта ҡалдырыу ауырыраҡ бит.

### Бәрәкәткә лә, һәләкәткә лә...

Инсебикәне ошо аҙымға барғаны өсөн ғәйепләргә лә йыйынмайым, бәлки, был фажиғәле хәлдең беҙ белмәгән башҡа сәбәптәре лә булғандыр, әммә беҙҙең ҡыҙ-ҡатындарға хас "Инсебикә синдромы"ның асылы тураһында әйтмәйенсә ҡала алмайым. Был һүҙбәйләнеште мин шартлы рәүештә килтерәм, шуға күрә тырнаҡ эсенә алам, йәғни уны тура мәғәнәһендә аңларға ярамай. Ир-аттың милләт, ғаилә, ҡатын-ҡыҙ, балалар алдындағы яуаплылығын һәм хәҙерге ысынбарлыҡтағы ир-атҡа ҡарата ҡуйылған һәр төрлө дәғүәләрҙе һис тә инҡар итмәйем. Дәғүәләр дөрөҫ ҡуйыла. Беҙҙең илдә генә түгел, донъя кимәлендә ҡуҙәтелә был тенденция. Йәмғиәттәге һәм ғаиләләге "көслө кеше" тигән вакантлы урынды ҡатын-ҡыҙ ир-ат көсһөҙ булғаны өсөн яуларға мәжбүр. Был яҡтан ҡарағанда, йәмғиәт, милләт, ғаилә өсөн ҡатын-ҡыҙҙы үҙ-үҙен ҡорбан итеү сигенә алып барып еткергән икән ир-ат, "Инсебикә синдромы" күренеше иң беренсе нәүбәттә ир-аттың ғәйебе һәм бәләһе.

Беҙҙең башҡорт ҡыҙ-ҡатындары ана шундай, Инсебикә кеүек, ғүмерҙәрҙән, яҙмыштарҙан көслөрәк булған ҡеүәткә эйә. Юғары аң менән дә, аң төбө менән дә аңлап булмаҫлыҡ бит ошо хәҡиҡәт. Әгәр ҙә иренән көслөрәк булған ҡатын уға: "Һин - булдыҡһыҙ, ҡулыңдан бер нәмә лә килмәй!" - тип әйтә икән, ошо хәл ирҙең йәшәү программаһына әүерелә лә ҡуя. Был осраҡта ир-егеттәребеҙҙең йәмғәтселектәге һәм ғаиләләге статусы табан менән ер араһына тиклем төшкәнен дә тоябыҙ. Табан менән ер араһына тиклем төшкән ир-ат ҡабат бер ваҡытта ла юғарыға күтәрелә алмай, уға хет "Ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөнән хакимиәт министры" портфелен тотторһондар. Хәйер, былар барыһы ла "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын" тигән әйтемдең аңлатмаһы ғыналыр.

"Инсебикә синдромы" легендала Инсебикәне һәләкәткә алып килә. Был хәл легендала ғына ҡалһын. Әйткәндәй, "Ете ҡыҙ" легендаһына ярашлы, ҡаҙаҡтарҙан ҡасып барыусы ете ҡыҙ ҙа, дошман ҡулына ҡабат төшмәҫ өсөн, күл эсенә инеп китә. Шул уҡ синдром. Ир-ат ҡорбан булмаған урында ҡатын-ҡыҙ һәләк була шул.

### Шуға күрә...

"Инсебикә синдромы" көсһөҙлөк билдәһе түгел, былдай сифатҡа көслө ихтыярлылар эйә. Был синдромды нисек кенә тәнҡитләнәк тә, кем белә, бәлки, ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙың тап ошо сифаты арҡаһында милләтебеҙ бөгөн йәшәйҙер. "Ҡорбанлыҡ" боронғо халыҡтарҙың төп йәшәү шартына әүерелгәнен иҫәпкә алһаҡ, әйтерһең дә, ул беҙҙең ҡанға һеңгән, йолаға әүерелгән, йәғни хәҙерге камил тормош, яҡты киләсәк өсөн һәр ваҡыт кемдер үҙен ҡорбан итергә тейеш.

Нескә заттарыбыҙҙағы был синдром беҙгә һәм башҡаларға ҡайһы саҡ ҡырыҫлыҡ, һауалылыҡ булып та күренә. Рауза сәскәһен, әгәр ҙә уның һабағында энәләре булмаһа, әллә ҡасан уҡ өҙөп алып китеп, тамырын да ҡоротор ҙар ине. Тимәк, бәрәкәткә лә, һәләкәткә лә алып килә "Инсебикә синдромы".

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ҮҘЕБЕҘ ХАҠЫНДА ҺҮҘЕБЕҘ

# ШИҒЫРҘАРЫҢ ИЛГӘ ОРАН ҺАЛА,

## Шиғырҙарың ҡора сымылдыҡ...

### Ҡатындарҙың изге бурысы

Әллә ниҙәр вәғәҙә иттеләр ҙә,
Мендерҙеләр хатта Айға ла.
Тик артманы унан шатлығыбыҙ,
Кәмемәне һис тә ҡайғы ла.

Әллә ниҙәр көсәнеләр кеүек,
Төшөрҙөләр диңгеҙ төбөнә.
Дарья нимә?
Ирҙәң ҡарашында
Бөтә ғәләм үҙе күренә.

Беҙ донъяны хәҙер көйләйбеҙ, тип,
Тотторҙолар ҡулға көйләнә.
Өй усағы быҫҡып һүнгән саҡта,
Күңгән мөрйә барын һөйләнә...

Түрәлектә микән ҡатын даны?
Ҡыҙҙар даны микән - юл саты?
Был быуат та гүзәллектән яҙып,
Ҡалыр микән беҙҙе оҙатып?

Тимер аттарҙа ла - сибәркәйҙәр,
Тауыштары айҡай ян-яҡты.
Бер ҡараһаң, ирҙәр Себер китә,
Бер ҡараһаң, улар айныҡҡан.

Илем ҡото - ҡатын-ҡыҙҙар, тиһәм,
Илем ҡорто кеүек яңғырай.
Ярай ауылдарҙа ғәмде юрап,
Аҡһаҡалдар ергә ҡот һорай,
Ағинәйҙәр нурлы таң юрай.

Ағып ҡына торған оҙон сәстәр,
Үргән толом ҡалды ҡырҡылып.
Ҡатын ҡотон һәр юғалтҡан минут
Йөҙәбеҙгәятты һыр булып.

Беҙ үҙебеҙ ирҙәр кеүек, тинек.
Әй, меҫкенлек!
Ялған мәртәбә!
Ир ҡеүәтен тапап үткән ҡатын
Ир буламы әллә иртәгә?

Әллә ниндәй ҙур-ҙур түрә - бисә,
Ил етәкләй хатта ҡатындар.
Ҡалтырана улар ҡарашынан
Быуаттарҙан килгән законда.

Күрһәтегеҙ берәй ҡатын-ҡыҙҙы
Ирҙән уҙып алтын һүҙ әйткән?
Имеш, берәү ирен тәҙәткәндә,
Сәпәкәйләп шайтан күҙәткән.

Бәндәбикәләрҙең зирәклеге
Шаҡыганда бөгөн асманды,
Бик ышанғым килә -
Милләтемдән
Ирҙе баҫыу хисе ҡасҡандыр!

Бик ышанғым килә Ерәнсәләй
Замандаштар әле бар саҡта,
Көл аҫтында ҡалған тарих тимәй,
Тоҡандырыр ҡатын усаҡты.

Киҫәкбикәләрҙең иман ҡото
Заман күҙҙәренә баҡҡанда,
Сабырлыҡ һәм тоғро ҡатын рухы
Терелгәндәй бөгөн ал ҡанда.

Уянғандай беҙҙә гүзәл заттың
Бала бағыу тигән бурысы.
Ниндәй яуҙар үткән!
Ырыҫ өҫтәп,
Бала тапҡандар бит уҙышып.

Киҫәкбикә инәй васыятын
Ялҡын телдәрендә уҡыным.
Ҡатындарҙың иман ҡото менән
Урап үтер милләт упҡынын.

Бәндәбикә инәй яҙған хаттар
Халыҡ хәтерендә һаҡлана.
Ир алдында ҡатын бурыстары
Хоҙай тарафынан яҡлана.

Ниндәй бәхет - ил ҡатыны түгел,
Ир ҡатыны булып дан алыу!
Шулдыр Ерҙә әсә нурын сәсеү,
Хоҙай ҡоло булып танылыу.

**Лариса АБДУЛЛИНА.**

### Сабырлыҡ

Сабырлыҡ ул - ҡатын затынандыр,
Һыны һылыу, буйы һомғолдор,
Йөҙө тыныс, изге һәм ягымлы,
Ҡараштары уйсан, һынсылдыр.
Индәренә аҡ селтәр шәл һалған,
Нәзәкәтле кейгән күлдәге.
Йөҙәк-беләҙектәр аҡ көмөштән,
Наҙҙар бөркөп балҡый күҙҙәре.
Баштарында - ап-аҡ яулыҡҡайы,
Тәсбих тотҡан ҡулын ҡаушырған.
Хоҙайыбыҙ ошо ҡатын-ҡыҙға
Донъя ғәмен ышанып тапшырған.
...Түҙемемдең сигенә сығып ҡайсаҡ
Түнкәргәндәй булһам донъянын,
Яндарымда пәйҙә булып был һын,
Әсәләрсә һона ҡулдарын.
Һуңғы тамсы шул саҡ таммай ҡала,
Әмәл табам йәшәй алырлыҡ.
Яндарымдан ғына китә күрмә,
Йәндәремдә етем итә күрмә,
Башҡорт Мадоннаһы - Сабырлыҡ!

**Таңһылыу ВӘЛИЕВА.**

### Мин - ҡатын-ҡыҙ!

Бесән сабам. Ергә ныҡлы баҫып,
Ҡолас ташлап, һелтәп салғымды.
Рәхәтләнеп бесән сапҡан саҡта
Онотамын бөтә ҡайғымды.

Мин - ҡатын-ҡыҙ.
Бәлки, килешмәйҙер,
Ирҙәр менән йәнәш ярышыу.
Тормош һынауҙарын инҡар итеп,
Буран-елдәренә ҡарышыу.

Нәзәкәтле, наҙлы ҡатын-ҡыҙға
Кемдәр генә шиғыр яҙмаған?
"Ҡатын-ҡыҙҙың көсө - көсһөҙлөктә",-
Кемдәр хатта уйлап сығарған.

Көсһөҙ, нескә, яҡлау-наҙға мохтаж
Минең дә бит килә булаһым,
Мөхәббәт һәм бәхет гөлдәренә
Күбәләктәй осоп ҡунаһым.

Мин - ҡатын-ҡыҙ.
Наҙлы, хисле булыу
Ҡатын-ҡыҙға бигерәк килешә.
...Мин яратам йөктә һөйрәшергә
Ирем менән бергә, йәнәшә.

Ер ҡаҙырға, утын әҙерләргә,
Өй төҙөргә, бесән сабырға.
Иңгә-иң терәшеп йәнәш булһаң,
Донъя йөгөн еңел тартырға.

Кәрәк булһа - наҙлы, хисле булам,
Кәрәк булһа - көслө, ныҡлы мин.
Ирем менән дәрәжәм бер икән-
Хөрмәткә һәм наҙға хаҡлы мин.

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**

### Совет ҡатыны мин

Был ҡулдарым күпте хәтерләйҙәр:
Иҫ белгәндән - бала бишеген,
Апаймын бит - бәүетергә тейеш,
Уянманы һис тә бер шигем.
Үҙем ҙурлыҡ һеперткене тотоп
Сүп йыйыуым, туҫтаҡ йыуыуым,
Үлән араһынан саҡ күренеп
Түтәлдәрҙе утап ҡуйыуым.
Биҙрәләрем ергә тейә-тейә
Индәремә һалған көйәнтә,
Утын ярмай, бесән сапмай ҡыҙҙар,
Атта сапмай тиеп кем әйтә!
Был ҡулдарым күпте хәтерләйҙәр:
Өй һылаған ҡыҙыл балсыҡты,
Аҙбар көрәп, хатта таҡта йышып,
Баҡса ҡаҙып күпме талсыҡты!
Юрған һырып, ҡульяулыҡтар сигеп,
Ойоҡбаштар бәйләп һәр кемгә,
Үҙем теккән ситса күлдәктәрем...
Эш етерлек ине һәр көнгә!
Был ҡулдарым хатта мылтыҡ тотто -
Ил һаҡларға илем өйрәтте.
Күпме китап асты, дәрес яҙҙы,
Ҡар өҫтөндә усаҡ дөрләтте.
Юҡтан бар итергә өйрәнде лә,
Бойҙай итә белде арышты,
Майгүл тиеп әйтмәһендәр өсөн
Ҡулым менән ҡулым ярышты.
Йүргәк йыуҙы, бала һөйҙө ҡулым,
Закон яҙҙы, яҙҙы китаптар.
Гел ашыҡтым, гел-гел ҡабаландым,
Тик үҙемә булды ваҡыт тар.
Барыһын да өйрәттеләр миңә,
Хатта һабан аты булырға.
Әммә бер кем бер саҡ өйрәтмәне
Нисек иргә ҡатын булырға...

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

### Башҡорт шағирәһе

Шиғырҙарың байраҡ елберҙәтә,
Шиғырҙарың ҡылыс сыңлата,
Шиғырҙарың тып-тып мәмерйәлә
Боронголоҡ тынын тыңлата.

Шиғырҙарың илгә оран һала,
Шиғырҙарың ҡора сымылдыҡ.
Бер ярһыныҡ, даулы тауышыңдан,
Бер тын ҡалдыҡ, йәнә шым булдыҡ...

Һин һөйләнең...
Һин күрһәттең беҙгә
Йөрәк түребеҙҙе шар асып.
Упҡындарға берсә уйылдыҡ та,
Күктәргә лә ҡайттыҡ бер ашып...

Һинең менән
Бөтә был донъялар
Янды, тунды, тынды, тулғаны...
Шул мәл ине -
Урал ҡуйынында
Башҡорт шағирәһе тыуғаны.

**Тамара ИСКӘНДӘРИӘ.**

### Китә бирһен ҡыҙҙар...

Китә бирһен ҡыҙҙар-ҡыйҙар, тиеп,
Гел шаяртыр ине әбей-һәбей.
Ошо һүҙҙәр иҫкә төшкән һайын,
Йөрәккәйем минең әрнеп-әрней.

Ҡый үләне кеүек ҡәҙерһеҙгә
Ҡала сәскә ише күпме ҡыҙҙар.
Йәберҙәргә кемдер дусар була,
Хыянатҡа, кемдәре - яңғыҙҙар.

Ҡайҙа китә ҡыҙҙар, кемгә китә?
Ҡыҙҙар китә яҙмыш ебен барлап.
Кем самалай улар киләсәген,
Кемдәр хәлен белә иғтибарлап?

Ниндәй затҡа, тиеп, һорамайҙар,
Таптырмайҙар беҙҙә оло ҡалым.
Ҡыҙҙар китә бирһен генә, тиҙәр,
Кейәүгә йә эшкә, тапһын малын.

Ҡыҙҙар китә яҙмыш ебен барлап,
Хиҫкә генә бәйләп араларҙы.
Яулыҡ етмәй аҙаҡ ябыр өсөн
Яңылышып алған яраларҙы.

Сыныҡтырыр һынауҙарын эҙләп,
Күҙ бәйләнеп, күрмәҫтәйҙе күҙләп,
Сәс төшмәҫтәй ергә баштар төшә,
Йығылыр ергә яҙмыш һалмай түшәк.

Алдаштыра тәҡдир хистәр менән,
Илаһилыҡ бөркҡән кистәр менән,
Еңеп ала, үҙ мөһөрөн һала
Ҡапыл аңлашылмаҫ көстәр менән.

Яңы ғүмер, килер йән хаҡына,
Тип аҡлайбыҙ инде аҙағынан.
Аҡлайбыҙ ҙа, ләкин һаҡламайбыҙ
Ник ҡыҙҙарҙы күңел ғазабынан?

Ярай инде, ярата бит, тиеп,
Ҡәҙерһеҙгә ҡала күпме ҡыҙҙар.
Ваҡытында затын ҡарамағас,
Һуң була шул, йөрәк кенә һыҙар.

Күкте иңләп осҡан азатлыҡҡа
Ҡалған көндәр тик һоҡланып үтер.
Ҡанаттары киҫелгәнгә әрнеп
Ҡыҙҙар тик үҙҙәрен ғәйеп итер.

Кем ҡыҙы, тип бер ҙә һорамаҫтар,
Әрләмәҫтәр бер ҙә аталарын.
Телгә алып бары сейләтерҙәр
Тик ҡыҙҙарҙың ғына хаталарын.

Заты затмы, тип бер ҡайырмайҙар,
Ҡыҙҙар көтмәй беҙҙә оло мәһәр.
Никах сәғәттәре һуҡҡан икән,
Китә бирһен, тиҙәр, иллә мәгәр.

Ҡыҙҙар илағанда гел уйлайым
Атай фатихаһын һәм ҡайышын.
Ояһында күргән, күнеккәнгә
Ҡарап баһалай бит ул айышын.

Ҡыҙҙар илағанда гел уйлайым
Ҡайҙа икән, тиеп ағайҙарын.
Һатып эстек тиеп маҡтаналар,
Хәл беләме улар, абайҙармы?

Ҡәҙерһеҙгә ҡалған һылыуҙарҙың
Күҙ йәштәре төшә кемдәргә?
Ҡалымдары ҡалын булмаһа ла,
Эләкһендәр ине тиңдәргә.

Китә бирһен ҡыҙҙар-ҡыйҙар, тиеп,
Гел шаяртыр ине әбей-һәбей.
Ҡыҙ балалар ҡәҙерһеҙгә ҡалған
Өммәтемә ҡарап йәнем әрней.

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА.**

(Дауамы 16-сы биттә).



ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЙҘЕ ШӘКӘРҺЕҘ ЭС

■ Америка ғалимдары диеталар, ябығыу темаһына яңы тикшеренеүҙәр уҙғарған. Һомғол буй-һын тураһында хыялланғанда рациондан сәйҙе тулыһынса алып ташларға кәрәк, ти улар. Сәй сәләмәтлеккә зыян килтерә алмай, әммә йыш ҡына сәй эсеү ғәҙәте бөтөн тырышлыҡты юҡҡа сығара. Етмәһә, сәйгә шәкәр һалып эсеү ғәҙәте зыянлы. Бер сынаяҡ сәйгә 1-2 балғалаҡ шәкәр һалаһығыҙ икән, был организмға кәрәкле уртаса калорияларҙың өстән бер өлөшөн тәшкил итәсәк. Шулай итеп, көн һайын биш сынаяҡ татлы сәй эсәһегеҙ икән, йылына бер килограмм артыҡ ауырлыҡ йыяһығыҙ. Был сәйҙән генә, уға ҡушып тәм-том да ашайһығыҙ икән, хәл тағы ла ҡатмарлаша. Шуға ла ғалимдар сәйгә ҡушып бер нәмә лә ашамаҫҡа кәңәш итә.

■ Кешеләргә ярҙам итергә атлығып торһағыҙ, тимәк, альтруистһығыҙ, фән телендә ундайҙарҙы шулай тип атап йөрөтәләр. Вашингтондағы баш мейеһе институты белгестәре билдәләүенсә, альтруистарҙың 90 проценты бары тик үҙенең мәнфәғәттәренән сығып эш итә. Ғалимдарға быны асыҡлау өсөн бер нисә психологик һәм социаль тикшеренеүҙәр үткәрергә тура килә. Иң ҡыҙығы, альтруистар кешеләр алдында гәйеп тойғоһо кисерә, шуға ла ярҙамға килә икән. Бары тик 2 процент ҡына эскерһеҙ ярҙамға килә һәм бының өсөн бер нәмә лә көтмәй.

■ Органик сүп-сарҙы өйҙә оҙаҡ һаҡлау сәләмәтлек өсөн зарарлы, тип иҫкәртә Берлиндың Йоғошло сирҙәр һәм пневмология клиникаһы табиптары. Сүп-сар тарҡалған саҡта барлыҡҡа килгән бәшмәктәр тәьсире һөҙөмтәһендә тире һәм тын юлы сирҙәре барлыҡҡа килеүе ихтимал. Хатта сүп биҙрәһенең ҡапҡасын асҡан мәлдә лә бәшмәк спораһы осоп, үпкәгә зыян килтереүе мөмкин. Бәшмәктәр аллергия, астма һәм лихорадка сирҙәренең сәбәпсеһе була ала. Шуға ла аш-һыу бүлмәһендәге сүп-сар һауытын көн һайын түгеп, йыуып тороу яҡшыраҡ.

■ Организм дөрөҫ эшләһен өсөн көн тәртибе лә мөһим роль уйнай. Дөрөҫ тукланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душ ҡойоноғоҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндөҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Америка ғалимдары кешенең киләсәк портретын төҙөп ҡараған. Вашингтон университеты хеҙмәткәрҙәре - тикшеренеүсе һәм рәссам Николай Ламм менән генетик Алан Кван 100 мең йылдан һуң йәшәйәсәк кешеләрҙе һүрәтләргә тырышҡан. Уларҙың күҙаллауы буйынса, эволюция, ген инженерияһы һәм космосты үҙләштереү кешенең тышҡы ҡиәфәтен нигеҙҙән үҙгәртәсәк. Тикшеренеүселәр фекеренсә, эволюция һөҙөмтәһендә баш мейеһе ҙураясаҡ, һөҙөмтәлә, маңлай ҙа киңәйәсәк. Бөгөнгө көн өсөн нормаға әүерелгән ген инженерияһы киләсәктә кешенең ҡиәфәтен үҙгәртеүҙә үҙ ролен уйнаясаҡ. Мәҫәлән, ата-әсәләр үҙҙәренең балаларының "генетик составы"н, шул иҫәптән, күҙҙәр, сәс төҫөн һайлай аласаҡ. Дөйөм алғанда, кешенең тышҡы йөҙө уның ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүе менән бәйле буласаҡ. Тикшеренеүселәр фараҙлауынса, йөҙҙәр артыҡ симметрик һәм бер-береһенә оҡшаш була барасаҡ.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**"Ни өсөн ҡатын-ҡыҙ үҙ сәләмәтлегенә үтә лә иғтибарлы булырға тейеш?" - тигән һорауға, моғайын, бер һүҙ менән генә: "Сөнки ул - киләсәк кешеһенә ғүмер биреүсе, уның һау-сәләмәт булып тыуыуы өсөн яуаплы", - тип әйтергә булалыр. Ысынлап та, йөрәк аҫтында 9 ай йөрөткән сабыйына әсә ниндәй сәләмәтлек бирһә, ул артабан да ошо иммунитет менән йәшәйәсәк, тиеүҙәре юҡҡа түгел. Ҡатын-ҡыҙҙар байрамы алдынан ошо мәсьәләгә тағы бер мөрәжәғәт итеп, табип-гинеколог Елена ПЛАКСИНАға үҙебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы бирҙек.**

# ҮҘЕГЕҘҘЕ ЯРАТЫҒЫҘ!



**➔ Ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарын иҫкәртеүҙә иң мөһиме булып нимә тора?**

- Әлбиттә, табип-гинекологҡа күренеү. Хатта бала табыу йортонда уҡ ҡыҙ балалар гинеколог тикшереүе үтә. Был артабан да дауам итергә тейеш һәм ҡыҙҙар мәктәпкәсә учреждениеға барғанда ла, мәктәпкә уҡырға төшкәндә лә, йәғни 6-7 йәштәрҙә, һуңынан инде 12-13 йәштә тикшерелә. 14 йәштән алып йыл һайын гинекологҡа күренеү мотлаҡ һанала. Был ҡатындарға ла ҡағыла. Уларға, әлбиттә, кольпоскопия, флораның таҙалығын тикшереү һәм онкология бармы, юҡмы икәнлеген асыҡлау өсөн цитология анализын тапшырыу зарур. Был процедуралар йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртергә, яман шеш процестарын һәм башҡа тайпылыштарҙы иртәрәк асыҡларға ярҙам итә.

Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ, күкрәк яман шешен иртәрәк асыҡлау өсөн, йылына бер тапҡыр маммологҡа күренергә тейеш. Бында инде күкрәк биҙҙәрен ультратауыш ярҙамында тикшереү күҙаллана, 40 йәштән алып йылына бер тапҡыр маммография үтеү мотлаҡ. Сөнки 30-80 процент ҡатын-ҡыҙҙа төрлө шештәр күҙәтелә. Шул иҫәптән 30 йәшкә тиклемге пациенттарҙың 25 процентында мастопатия осрай, 40 йәштән һуң был һан 60 процентҡа етә.

**➔ Был сир нисек барлыҡҡа килә һәм уның яман шешкә әйләнеүе мөмкинме?**

- Мастопатия гормондарҙың үҙ функцияһын тейешле кимәлдә башҡармауы йәки уның боҙолоуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә, әммә яман шеш ауырыуҙарына ҡарамай. Ләкин уның диффуз формаһы фонында рак барлыҡҡа килеүе - 3-5, ә төйөн формалаһында 30-40 тапҡырға йышыраҡ осрай. Шул уҡ ваҡытта ошо нигеҙҙәге яман шештәр йәш ҡатындарҙа йышыраҡ күҙәтелә.

**➔ Тимәк, хәүеф юҡ, тип әйтеп булмай. Ә бына тикшереү үтеү өсөн ҡайһы ваҡытта табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк?**

- Күрем циклының 5-12 көндәре ҡулай. Менопауза ваҡытында инде теләһә ҡайһы көндә лә тикшерелергә була. Ғөмүмән, һәр ҡатын-ҡыҙ үҙенең күрем көндәре календарын алып барырға тейеш. Был цикл - уның сәләмәтлеге күрһәткесе лә. Быны репродуктив йәшкә генә ҡайтарып ҡалдырырға ярамай.

**➔ Йәшерен-батырыны юҡ, бөгөн ҡала ерҙәрендә генә түгел, хатта ауылдарҙа ла енси бәйһеҙлек киң таралған. Енси гигиена хаҡында ла аңлатып китһәгеҙ яҡшы булыр ине...**

- Енси инфекцияларҙан һаҡланыуҙың иң ышаныслы ысулы - даими партнерың булыуы һәм презерватив ҡулланыу. Әйе, милли баҫмалар был хаҡта яҙырға, мосолмандар был турала асыҡтан-асыҡ һөйләшергә тартына, әммә был "тыйылған емеш" тураһындағы мәғлүмәтте урамдан йәки интернеттан алғансы, табип кәңәшен тотоу йәки белгес кәңәшен уҡыған әсәйең менән һөйләшеү күпкә яҡшыраҡ. Сөнки үҙеңдән һуң саф тоҡом ҡалдырғың, һау-сәләмәт балалар табып үҫтергең килә икән, ғиффәтлелегеңде һаҡлау зарур. Ләкин тормошта төрлө осраҡтар булып тора. Әгәр осраҡлы енси мөнәсәбәт ваҡытында һаҡланмаһағыҙ, мотлаҡ комплекслы анализ тапшырығыҙ һәм дерматовенерологҡа консультацияға барығыҙ, сөнки ваҡытты һуҙып йөрөү һеҙҙең файҙаға булмауы ла ихтимал. Шулай уҡ репродуктив осорҙа ҡатын-ҡыҙға осраҡлы йөккә уҙыуҙан һаҡланыу зарур. Уның ысулдары, организмдың үҙенсәлектәренән сығып, шәхсән һайлана. Был аборттан иҫкәртеү ҙә булып тора, тимәк, ҡатын-ҡыҙ организмы стресҡа дусар ителмәй.

Төрлө фекерҙәр йөрөһә лә, табип буларaҡ шуны әйтә алам - даими партнер менән даими енси бәйләнеш ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарынан иң яҡшы профилактика, күтәренке кәйеф һәм сәләмәтлек нигеҙе. Сөнки был процесс янбаштағы, аналыҡтағы, түллек биҙендәге ҡан әйләнешен әүҙемләштерә, лимфаларҙың, күҙәнәктәргә йәшәү өсөн кәрәк булған продукттар тупланған күҙәнәкара шыйыҡса эшмәкәрлеген яҡшырта.

Ә инде бәйһеҙ енси тормош алып барғанда енси юл менән күсеүсе (ЗППП) йоғошло сирҙәр эләктерергә мөмкин. Улар бик күп, мәҫәлән: хламидиоз, микоплазмоз, уреаплазмоз, гардиерелез, кандидоз, гениталь герпес, гениталь һөйәлдәр, гонорея, трихомоноз. Был сирҙәр ваҡыт үткәс кесе янбаш ағзаларының ялҡынһыныуына сәбәп булып, артабан түлһеҙлеккә килтереүе ихтимал.

**➔ Был сирҙәрҙең тәүге билдәләрен нисек асыҡларға мөмкин?**

- Инәлек еңсәһенән ниндәйҙер бүлендектәр сыға тип кенә үҙаллы диагноз ҡуйырға ярамай. Хатта тейешле анализдар һәм клиник тикшереү үткәрмәйенсә, гинеколог та ниндәй сир икәнен билдәләй алмай. Шулай ҙа ауырыу башланыуы тураһында хәбәр итеүсе беренсе ябай билдәләр бар: һары, аҡ йәки йәшел бүлендектәр; енси ағзаларҙы ҡысыттырыусы аҡ йәки һарғылт төҫтәге бүлендектәр; насар еҫ сыҡҡан һәм енси ҡуҙғыу ваҡытында көсәйгән бүлендектәр; бөйәл килеүен ҡатмарлаштырған һәм эстең аҫҡы өлөшөн ауырттырған һары бүлендектәр; ҡырҡыу еҫле, ҡуйы ҡанлы эренле бүлендектәр; күрем циклы араһында барлыҡҡа килгән ҡанлы бүлендектәр; йөклө ваҡытта һорғолт йәки ҡанлы бүлендектәр; менопауза ваҡытында ҡанлы бүлендектәр. Ошо билдәләр булғанда мотлаҡ гинекологҡа күренергә кәрәк

**➔ Ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуҙары профилактикаһында ҡатын-ҡыҙ гигиенаһы ҙур әһәмиәткә эйә икәне һәр кемгә билдәле. Шулай ҙа, ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тиҙәр...**

- Ҡағиҙәләр тәү ҡарауға ябай ғына: эске енси ағзаларҙы һәр саҡ таҙа тоторға; эске кейем таҙалығына иғтибар итергә; эске кейемде көн һайын алмаштырырға; күрем ваҡытында таҙалыҡ тураһында айырыуса хәстәрлек күрергә кәрәк. Был ваҡытта аналыҡ муйынсаһы киңәйә һәм ауырыу тыуҙырыусы бактериялар, вирустар үтеп инә ала, шулай уҡ иммунитет та көсһеҙләнә. Күрем көндәрендә ауыр эш эшләү ҙә ярамай.

Шулай уҡ бөйәл ҡыуығын һәм эсәктәрҙе даими бушатып тороу кәрәк. Әгәр гел генә ваҡыт юҡҡа һылтанып, был ваҡытты үткәреп ебәрһәгеҙ, аналыҡ торошонон үҙгәреүенә, уның бөгөлөүенә (загиб) һәм кесе янбашта урынлашҡан ағзаларҙа ҡан әйләнешенең насарайыуына юл ҡуясаҡһығыҙ.

Туҡланыу рационына ла иғтибар итергә кәрәк: йәшелсә, емеш-еләк эсәктәрҙе таҙарта һәм эшмәкәрләгән көйләй. Углеводтарҙы (бәлештәр, шоколад, сүпрәле ҡамырҙан бешерелгән икмәк изделиелары) саманан артыҡ ҡулланыу молочница барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе була.

Физик күнегеүҙәр эшләргә, көнөнә кәм тигәндә 30 минут шәп-шәп атлап йәйәү йөрөргә тырышырға кәрәк. Һәр ярты сәғәт һайын кәүҙә торошон үҙгәртегеҙ, ултырһағыҙ, тороп йөрөп алығыҙ, ҡалаҡ һөйәктәрегеҙҙе бер-береһенә яҡынайтығыҙ, муйынығыҙҙы һуҙығыҙ һәм эскә тартығыҙ, өҫтәлгә тотоноп, ултырғыста өйөрөлөгөҙ, янбаш мускулдарын ҡыҫығыҙ һәм язығыҙ.

**➔ Яҙ яҡынлашыу менән, ғәҙәттә, гүзәл зат тиҙерәк матур, еңел кейемдәргә күсергә тырыша. Һөҙөмтәлә һалҡын алдырып ауырыуҙар күбәйә, иммунитет түбәнәйә. Ҡатын-ҡыҙҙарға ошо миҙгелдә ниндәй кәңәштәр бирерһегеҙ?**

- Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙ һәр саҡ матур булырға тейеш, әммә саманы онотorға ла ярамай. Бигерәк тә ҡыҙҙарға сәләмәтлектәрен йәштән һаҡларға, кейенеп йөрөргә, аяҡтарҙы, билде өшөтмәҫкә кәрәк. Йәш ваҡытта һиҙелмәһә лә, олоғая килә йәки кейәүгә сыҡҡас ошолай йөрөүҙең касафаты үҙен һиҙҙерә башлаясаҡ. Ә инде миҙгелгә бәйле һалҡын алдырыуҙан һаҡланыу өсөн халыҡ медицинаһынан бер нисә кәңәш тәҡдим итер инем:

- 10 ҡалаҡ шпинат һутына 6 ҡалаҡ кишер һуты ҡушып, иртән ас ҡарынға;
- тоҙло кәбеҫтәнең һутын аш алғанан стакандың өстән бер өлөшө күләмендә;
- 2 лимон+2 апельсин+200 грамм кишер һутын көнөнә ике тапҡыр эсергә. Еләк-емештән, йәшелсәләрҙән һығылған һут пастеризацияланған һуттарға ҡарағанда күпкә файҙалы.

Мәлдән файҙаланып, барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы 8 Март - Бөтә донъя ҡатын-ҡыҙҙар байрамы менән ҡотлайым. Үҙегеҙҙе яратығыҙ, һаҡлағыҙ һәм баһалағыҙ, сәләмәт булығыҙ!

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# АҒИНӘЙҘӘРҘЕҢ...

## сауаплы эштәре, изге ҡанатлы һүҙҙәре

**Бынан биш йыл элек Баймаҡта Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының ойоштороу йыйыны үтеп, ошо матур хәрәкәткә старт бирелгәйне. Ошо йылдар эсендә был хәрәкәт республиканың күп райондарында таралып китеп, бик күп эштәр башҡарырға өлгөрҙө. Сибай ҡалаһы, Хәйбулла, Учалы, Әбйәлил, Йылайыр, Ейәнсура, Күгәрсен, Белорет, Архангель, Ишембай, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Мәләүез, Федоровка, Стәрлебаш, Әлшәй һәм башҡа район ағинәйҙәренең эшен күҙәтеп, ишетеп кенә ҡалмайбыҙ, улар менән әленән-әле осрашып, тәжрибә уртаҡлашып, хәбәрләшеп торабыҙ.**

Баймаҡ ҡалаһы һәм районы ағинәйҙәренең дә, бер ҡорға тупланып, илйорт эсендәге бар хәл-ваҡиғалар ыңғайына көйләнеп, ата-бабаларыбыҙҙан, оләсәйҙәребеҙҙән быуындан-быуынға күсә килгән ауыҙ-тел ижады, халыҡ педагогикаһы өлгөләрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, аш-һыу оҫталығын, йолаларын тергеҙергә, милләтебеҙҙең рухын күтәрергә, ауылдарға йән өрөргә тырышып йөрөгән көнө бөгөн. Ағинәйҙәребеҙҙең күбеһе юғары белемле, эшләп йөрөгәндәре лә, хаҡлы ялға сыҡҡандары ла бар. Һәр хәлдә, заман ағышын, донъяуи үҙгәрештәрҙе тойоп, шуға ҡулайлашырға тырышып, үҙ тәжрибәбеҙ һәм көсөбеҙҙө төрлө файҙалы эштәргә сарыф итеү менән мәшғүлбеҙ. Үҙебеҙ хаҡында ла онотмайбыҙ: интернет технологияларын да үҙләштереп, йыр, бейеү түңәрәктәренә лә, спорт залдарына ла йөрөп, ғөр киләбеҙ. Бына шулай беҙҙең ағинәйҙәр бер төрлә генә түгел, ә күп төрлө тәрбиәүи, ижади, маҡсатлы, планлы эшмәкәрлек алып бара. Беҙҙе әйҙәп алып йөрөүсе Баймаҡ ағинәйҙәре ҡоро етәксеһе Хөрмә Биктимерова һәм арҡа терәр кешеләребеҙ - район хакимиәте башлығы урынбасары Гөлшат Сирғәлина, район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Гөлназ Йыһаншинаға, Үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры Земфира Ильясоваға, кураторыбыҙ Сәрүәрә Иҙелбаеваға рәхмәтлебеҙ.

Ағинәйлек - ул ҡатын-ҡыҙға хас бар күркәм сифаттарға эйә булыу тигәнде аңлата. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, теге торғонлоҡ тип аталған йылдарҙа ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ошо сифаттарҙан яҙа, милләткә хас булмаған йәшәү рәүешен үҙ итә башлағайны бит. Ләкин башҡорт ҡатын-ҡыҙының ысын асылын һаҡлаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ барыбер күп, Аллаға шөкөр. Беҙ бөгөн уларҙан өлгө алырға, ағинәйлек сифаттарын үҙ итергә ынтылырға тейешбеҙ. Беҙҙең ойошманың маҡсаты ла ошо. Шуның өсөн үҙ арабыҙға йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла, ҡыҙ балаларҙы ла ылыҡтырыуҙы бурыс итеп ҡуйғанбыҙ. Ойоштороған тәрбиәүи сараларыбыҙ ошоға йүнәлдерелгән. Хәҙерге көндә 50-80 йәште үткән хеҙмәт ветерандарынан тыш, 30-50 йәштәр тирәһендәге ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың да һәр сарала әүҙемлек күрһәтеүе күнелде йылыта.

Эшләгән эштәребеҙ, үткәргән сараларыбыҙ хаҡында бер нисә һүҙ. Ҡор булып ойошҡас та, ағинәйҙәребеҙ милли кейемдәр тектереп алды. Хәҙер инде барыбыҙ ҙа милли биҙәүестәр - селтәр (һаҡал, яға, түшелдерек), ҡашмауҙар эшләргә тотондоҡ. Милли кейемдәребеҙҙе кейеп, былтыр май айында Өфөлә үткән "Башҡорт милли кейеме" байрамында, декабрҙә иһә, селтәр-ҡашмауҙарыбыҙҙы кейеп, "Селтәр" байрамында ҡатнашып ҡайттыҡ. Республика "Ағинәй" ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева беҙҙе ошондай сараларға йәлеп итеп, башҡа райондар ағинәйҙәре менән осрашторып, тәжрибә уртаҡлаштырып тора.

Халҡыбыҙ йолаларын, халҡыбыҙҙың тәрбиәүи мәктәбен тергеҙеүҙе төүге маҡсат итеп алып, тап Баймаҡ ағинәйҙәре "Өләсәйем һандығы" тигән акция уйлап сығарғайны. Быны нисәмә йыл инде ошо акцияны районды бар ауылдарында ҡабат-ҡабат үткәрәбеҙ, өләсәй һандығына милли кейемдәребеҙ, милли биҙәүестәребеҙ, милли йорт ҡаралтылары ғына түгел, ә төрлө йолалар ҙа "һыя" икәнен ғәмәлдә күрһәтәбеҙ. Ҡартына ла, йәшенә лә оҡшай торған матур тамаша килеп сыға. Белеүебеҙсә, беҙҙең "Өләсәйем һандығы" байрамы хәҙер күп райондарға таралды.

Мәктәптәрҙә, колледждарҙа тәрбиәүи маҡсатта төрлө һөйләшеүҙәр үткәреүҙе лә даими ҡабатлап торабыҙ. Мәҫәлән, "Ҡыҙ тыйнаҡ булһа, егет йыйнаҡ була" тигән темаға һөйләшеүҙәргә төрлө белгестәрҙе, врачтарҙы ла йәлеп итәбеҙ. Бындай осрашыуҙарҙың файҙалы булыуын уҡытыусылар ҙа, атай-әсәйҙәр ҙә дәлилләй.

Районда һәм ҡалала үткән бар байрамдар, баш ҡала ҡунаҡтары - яҙыусылар, шағирҙар, артистар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре менән үткәрелгән осрашыуҙар уртаһында һәр саҡ беҙҙең ағинәйҙәр йөрөй. Районда кино йылына арнап үткәрелгән "Алтын ҡомартҡы" эстафетаһында, "Яратам һине, тормош" район фестивалендә, хатта китапханасылар үткәргән шиғыр һөйләүселәр бәйгеһендә лә район ағинәйҙәре әүҙем ҡатнаша. Экологик өмәләр ойоштороу, тәбиғәтебеҙҙе ҡурсалау саралары ла, төрлө мәрхәмәтлек, хәйриә акциялары ла улар иғтибарынан ситтә ҡалмай. Ағинәйҙәребеҙ яҙын, көҙөн хәрби комиссариат алдында йәш егеттәрҙе изге фатихаларын биреп, айыҡ йолалар менән әрме сафына оҙата. Әйткәндәй, ойошма ағзаларының тағы бер күркәм эшмәкәрлеге - эскелеккә ҡаршы көрәшкә дәррәү ҡушылып китте улар. Эскелек менән шөғөлләнгән атай-әсәйҙәрҙе бер аҙ "ҡыҙҙырып" алалар, өгөт-нәсихәт уҡыйҙар. Бындай аралашыуҙар ҙа һөҙөмтәһеҙ булмаҫ, тигән фекерҙәбеҙ, сөнки эскелек тә - социаль сир бит, уны ла дауаларға, иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаҫҡа кәрәк.

Шулай итеп, Баймаҡ ҡала һәм ауыл ағинәйҙәре ҙур йәмәғәт ойошмаһына тупланып, ауылдарыбыҙға ҡот, йәм ҡундырыусы, илебеҙгә, еребеҙгә ырыҫ-ҡот, тыныслыҡ көҫәүсе, башҡорт ғаиләһе усағын ныҡытыусы, йәш быуынға иман, әҙәп, ғилем, мәҙәниәт өлгөһө күрәһәтеүсе бер көскә әйләнде. Киләсәккә пландарыбыҙ бик ҙур. Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына ҡарата арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙ шәхестәребеҙҙең тормош юлы менән таныштырырға ниәтләйбеҙ. Районыбыҙҙың хоҙур тәбиғәтен тағы ла матурыраҡ итеү өсөн дә көс һаласаҡбыҙ. Ағинәйҙәр һүҙе изге ҡанатлы, ҡылған эштәребеҙ ҙә сауаплы булһа ине, тигән маҡсатта йылдар дәүерен дауам итәбеҙ, бәлки, халыҡ ҡуйыр быға баһаны, тигән ышаныста ҡалабыҙ. Республикабыҙҙың барлыҡ ағинәйҙәрен, ағинәйлек сифаттарын үҙләштерергә ынтылған барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы 8 Март байрамы менән ҡотлайбыҙ.

**Зәһрә АЙЫТҠОЛОВА,**
**Баймаҡ районы**
**"Ағинәй" йәмәғәт**
**ойошмаһы ағзаһы.**



УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Йылмайығыҙ

Йылмайыу - йөҙөгөҙҙә фекерҙәрегеҙҙе сағылдырыу ул! Ул һеҙҙең ышаныслы хаҡында һөйләй. Ышаныс булмағанда, хәүеф, хәстәрлектәр борсоғанда, йылмайыуы ауыр. Ысын хистәрегеҙҙе күрһәтергә теләмәһәгеҙ, көсәнеп йылмайғанығыҙ күренеп торасаҡ. Быны хәл итеү өсөн проблеманың төбөнә төшөгөҙ һәм негатив образығыҙҙы үҙгәртегеҙ.

Кемгәләр йылмайығыҙ, ә кем өсөндөр түгел. Бында бик ҙур айырма ята. Кемгәлер йылмайһағыҙ, үҙегеҙҙең ихласлығығыҙҙы күрһәтәһегеҙ. Икенсе кеше быны тойоп, һеҙгә яуап итеп йылмайыр. Был: "Мине күреүегеҙ һәм үҙемде әһәмиәтле итеп тойорға ярҙам итеүегеҙ өсөн рәхмәт!" - тиеү ысулы. Йылмайырға теләргә һәм тормош юлығыҙҙа осраусыларға бәхет бүләк итергә өйрәнегеҙ. Бөгөн йылмайырға өйрәнегеҙ һәм бер йылмайыуҙың ниндәй мөғжизә тыуҙырыуын күрерһегеҙ. Исегеҙҙә тотоғоҙ: һеҙҙең йылмайыуығыҙ - иң ҡиммәтле сифаттарығыҙҙың береһе!

### Компанияны ентекле һайлағыҙ

Кем менән аралашаһығыҙ, шулар һеҙҙең тормошоғоҙға ҙур йоғонто яһай. Ыңғай әңгәмәләргә ҡушылыуҙы ғына түгел, ыңғай көйләнештә булған кешеләр менән йышыраҡ аралашыуҙы үҙегеҙгә маҡсат итеп ҡуйығыҙ. Улар һеҙҙе илһамландырыусы, дәртләндереүсе, тормошоғоҙҙо сағыуыраҡ яһаусы һәм ижадығыҙға ярҙам итеүсе. Кире ҡарашлы кешеләр барлыҡ энергиягыҙҙы үҙҙәренең мыжыҡлығы һәм зарланыуы менән даими һура. Мөмкин булған тиклем бындай "энергетик вампирҙарҙы" тормошоғоҙға индермәгеҙ, кешеләргә энергия һәм ыңғай көйләнеш менән ашҡынығыҙ.

### Ыңғай менталь мөнәсәбәт

Күптәр, кеше ыңғайға көйләнеп, бары тик проблемаларынан, фажиғәләренән, өмөтһеҙлектән ҡасырға тырыша, тип уйлай. Әммә барыһы ла киреһенсә. Ыңғай көйләнеш - үҙеңдең проблемаларыңа, кешелек проблемаларына күҙ һалыу һәм уларҙы конструктив ғәмәлдәр менән хәл итергә тырышыу ул. Кире һәм ыңғай көйләнгән кеше араһындағы айырма ике кешенең һыулы стаканға реакцияһын хәтерләтә. Пессимист стакан яртылаш буш, тиһә, оптимист, стакан уның яртылаш тулы булыуын күрә. Ыңғай көйләнеш өҫтөнлөктәрҙе терәк итеп, көсһеҙлөктө еңеп сығырға ярҙам итә. Ул барыһы ла бөйөк булыу өсөн тыуғанлығын аңларға булыша, сөнки беҙҙең һәр ҡайныбыҙҙа теләһә ниндәй хыялыбыҙҙы тормошҡа ашырырлыҡ көс бар. Ул яҡшы нәмәләргә генә иғтибар туплап, үҙегеҙ, башҡалар һәм донъя өсөн мөһим тип иҫәпләгәндәренә ҙур иғтибар бирергә ярҙам итәсәк. Бөтөн ыңғай нәмәне иғтибарға алып, һеҙ магнит кеүек тағы ла күберәк яҡшылыҡ тартаһығыҙ.

Ыңғай фекерләүҙең артында ыңғай ғәмәлдәр тормаһа, уның бер мәғәнәһе юҡ. Фекерҙәр йәки аҡыл энергияһы ғәмәлдәргә, йәғни кинетик энергияға йүнәлтелергә тейеш. Әүҙем ғәмәлдәрҙең кинетик энергияһы төпкә анды көсәйтә. Дөрөҫ итеп ҡулланғанда, был маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙың автоматлаштырылған механизмы хаталарҙы төҙәтә, йүнәлеште үҙгәртә һәм билдәләнгән маҡсатҡа алып бара.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ФИҘАҠӘР ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**7-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Әйтем. Биишева. Әйбер. Тышау. Андыҙ. Реактор. Талхина. Алдар. Манара. Әүрәү. Әй. БыҒау. Дини. Әрем. Шамбы. Әрней. Йәше. Тәкмәс. Койка. Ниғмәти. Ҡышлау.

**Вертикаль буйынса:** Теләктәш. Тәлмәрйен. Иҙеүкәй. Бина. Тырнаҡ. Урама. Әсирә. Әрмәк. Маймыл. Бикбай. Дөйә. Әсғәт. Миагра. Ир. Ара. Бишек. Лапы. Арҡа. Ҙур. Уҡыһа.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+
**5 март "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәнһүҙин), комедия 16+
**7 март "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия 12+
**8 март "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+
**9 март "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтгәлиева), лирик комедия 12+
**10 март Шәүрә Дилмөхәмәтованың** бенефисы 6+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4 март "Гәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия 16+
**7 март "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+
**8 март "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 12.00 0+
**10 март "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**8 март "Һатам! Иремде һатам!!!"** (Н. Гәйетбаев), комедия 12+
**9 март "Аҙашҡан ҡунаҡ"** (Н. Птушкина), комедия 12+
**10 март "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 март "Иң яҡшы көн" - 1 көндә 10 концерт!** 11.00 Колонналы зал - "Күләгәләр моңо". 12.00 Орган залы "Бергә музыка тыңлайбыҙ". 13.00 Ҙур залда Балалар академияһы. 14.00 Орган зал - "Әҙәби шәмбе". 15.00 Онлайн режимда - Мәскәү филармонияһы академия симфоник оркестры концерты. 16.00 Орган залы - "Сәнғәт менән диалог" Нестеров музейы менән берлектә. 17.00 "Орлан" һәм "Балалайка-бэнд". 18.00 Ҙур залда "Карауан" эстрада төркөмөнөң юбилей концерты. Орган залында "Ғаилә өсөн концерттар" - Эльвира Хәйретдинова.

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4 март "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). Башлана 12.00, 14.00 0+
**5 март "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен) Башлана 12.00, 14.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (7) дүшәмбе | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |
| 7 (8) шишәмбе | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |
| 8 (9) шаршамбы | 6:20 | 7:50 | 13:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |
| 9 (10) кесе йома | 6:18 | 7:48 | 13:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 10 (11) йома | 6:15 | 7:45 | 13:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |
| 11 (12) шәмбе | 6:13 | 7:43 | 13:30 | 17:40 | 19:10 | 20:40 |
| 12 (13) йәкшәмбе | 6:10 | 7:40 | 13:30 | 17:42 | 19:12 | 20:42 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

# "УРАЛ БАТЫР" ФИЛЬМЫ

**Өфөлә "Урал батыр" тулы метражлы нәфис фильмында төп һәм башҡа ролдәргә кастинг иғлан ителгән. Ҡатнашыусылар 18-25 йәштә булырға тейеш, башҡорт телен белеү мотлаҡ. Кастинг 18 мартта көндөҙгө сәғәт 2-лә Башҡорт дәүләт филармонияһында уҙа.**

"Урал батыр" нәфис фильмы быйыл башҡорт халыҡ эпосы мотивтары буйынса төшөрөлә. Сюжеттың нигеҙен Урал батырҙың кешеләрҙең именлеге өсөн героик көрәше тәшкил итә. Эпоста ваҡиғалар фантастик донъяла бара, унда ябай кешегә хас булмаған һәләткә эйә геройҙар бөйөк йәки насар ғәмәлдәр ҡыла. "Фильмда изгелек һәм яуызлыҡ, йәшәү һәм үлем, үлемһеҙлек темалары төп урынды биләй. Эпостың төп темалары бөгөн дә актуаль. Фильм мөһим йәмғәтселек, әхлаҡи һәм фәлсәфәүи темаларҙы күтәрә. Уларҙы асыу өсөн кино индустрияһының яңы саралары файҙаланыла", - тип һөйләнә фильмдың авторы һәм продюсеры Гәүһәр Батталова.

Фильмды төшөрөү өсөн махсус рәүештә үҙенсәлекле кейемдәр тегеү, декорациялар - ер аҫты һәм һыу аҫты батшалыҡтарын ҡороу ҡаралған. Һуңынан улар республика музей залдары фондын тулыландырасаҡ. Кинотаҫма күбеһенсә Бөрйән районындағы Йылҡысыҡҡан күлендә, Шүлгәнташ мәмерйәһендә төшөрөлә. Фильмда башҡорт халыҡ уйындарын, йолаларын күрһәтеү күҙаллана. Кинотаҫма өсөн махсус рәүештә яңы бейеүҙәр ҡуйыла, яңы йырҙар ижад ителә башлаған. Проект башҡорт телендә, рус телендәге субтитрҙар менән эшләнә. Премьера 2018 йылға билдәләнгән. Уны бойомға ашырыу өсөн Башҡортостан Башлығының 13,5 миллион һумлыҡ гранты бүленгән.

Проекттың төп бурыстары: башҡорт халҡының уникаль "Урал батыр" эпосын популярлаштырыу, тамашасыларҙы боронғо башҡорттарҙың тормошо һәм көнкүреше менән таныштырыу, республика халҡының мәҙәни кимәлен күтәреү, "Урал батыр" эпосын халыҡ-ара кимәлгә сығарыу, нәфис фильмды инглиз теленә тәржемә итеү.

**"БАШИНФОРМ".**

*ҮҘЕБЕҘ ХАҠЫНДА ҺҮҘЕБЕҘ*

# ШИҒЫРҘАРЫН ИЛГӘ ОРАН ҺАЛА,

## Шиғырҙарын ҡора сымылдыҡ...

(Башы 11-се биттә).

### Илкәйемдә шундай апайҙар бар...

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Һылыулығы телдән яҙҙыра,
Һыны рәссамдарҙы әсир итә,
Ҡараштары шиғыр яҙҙыра.

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Һендереп тә генә һүҙ әйткән.
Күңелдәрҙе аяп, йәнде имләп
Ҡылған хаталарҙы төҙәткән.

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Ирҙәр күтәрмәçлек йөк тартҡан,
Дошмандарға зәһәр уғын атҡан,
Сабып килгән атты туҡтатҡан.

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Бар халҡымдың рухын күтәргән,
Йәнкәйҙәрен тапап уҙһалар ҙа
Юғарыраҡ улар күптәрҙән.

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Бәндәбикә ише һәр бере!
Ғәзиз күреп, йөнен иретәйек,
Ус төбөндә генә йөрөтәйек,
Ҡыҫҡа бит ул бәндә ғүмере!

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

### Ҡырҡ ҡатын

Беҙ ҡырҡ ҡатын.
Ирҙәр яуҙа беҙҙең,
Мал, дан,тиеп, сикһеҙ алышта.
Уларға һин, Раббым, бир сабырлыҡ,
Ҡыҙғаныуҙан, һыҙланыуҙан, юҡһа,
Йәнгенәбеҙ беҙҙең ҡороша.

Тере микән, тигән уй сикмәүҙән
Күҙебеҙҙең тутыға ҡоросо.
Һикһән ҡулыбыҙ ҡаушырылыр ине,
Бәпес бәпләп йәки йәр иркәләп, -
Ҡынға инһә ирҙәр ҡылысы.

Беҙ ҡырҡ ҡатын.
Ирҙәр өйҙә саҡта,
Түп-түңәрәк көткән донъябыҙ.
Ҡырҡмаһа ҡырҡ сүрәткә инеп,
Өмөт, өммәт менән һуғарылған
Матурҙан да матур булабыҙ.

Беҙ ҡырҡ ҡатын.
Ирҙәр һунар итә.
Менгеләре микән дағалы?
Бөтмәгәнме икән көлсәләре?
Етмәгәнме ҡош-ҡорт баштарына, -
Мәхрүм итеп бала-сағаны?

Беҙ ҡырҡ ҡатын.
Алтын ҡаҙа ирҙәр.
Нишләтәләр икән ул саҡлым?
Алтын яткан ерҙә ен мыжғый, ти,
Зәхмәттәрҙән генә, эй, арала, -
Таянысын йорт һәм усаҡтың.

Беҙ ҡырҡ ҡатын.
Ултыра ирҙәребеҙ,
Сыҡҡан ерҙән хаҡлыҡ дауларға.
Һындырып ҡуймағайҙар рухтарын, тип
Ҡотобоҙ ғына осоп, сәйнәп уртты,
Ҡырҡыбыҙ ҡырҡ ерҙә ялбара.

Беҙ ҡырҡ ҡатын.
Көтөп көтөк булдыҡ.
Усаҡ яҡтыҡ - ил-йорт билгеһе.
...Өйөлөп ята алтын. Затлы тундар..
Ник эленһен шулар күҙебеҙгә -
Ир-егеттең зәғиф күбеһе...

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

### Мин донъяға тик яратып бағам

Мин - ҡатын-ҡыҙ. Хафаларға ҡалам:
Күпме яуҙар уҙған ер йөҙөнән,
Күпме бола, күпме мәхшәр үткән
Тарихтағы йылдар өйөмөнән!

Һоҡландырмай мине ҡылыс сыны,
Батырҙарҙың түккән йөрәк ҡаны,
Бөйөк ҡыйралыштар, оло еңеү,
Ҡолдар йәки ҡорбандарҙың һаны.

Мин - ҡатын-ҡыҙ. Яҡын минә йәшәү,
Һулыш, ҡояш, зәңгәр күк һәм ысыҡ!
Сабыйҙарҙың төмле йоҡолары
Тыуған йортта. Унда ниндәй ышыҡ!

Йүләр уйын кеүек илдәр баҫыу,
Сит ерҙәрҙән ташыу байлыҡ, алтын.
Ғәзиз минә бары тыуған тупраҡ,
Унда үҫкән икмәк кенә татлы!

Мин - ҡатын-ҡыҙ! Хәсрәттәрем ябай:
Һаҡлайым өй йәмен, үҫә балам.
Мин донъяға бирәм тик изгелек,
Мин донъяға тик яратып бағам.

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА.**

*ВИКТОРИНА*



## ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Был юлы Гөлсирә Ғиззәтуллина-Ғәйсарованың "Йәннәт һулышы" повесы буйынса һорауҙар тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Әҫәрҙең төп героиняһы Дилбәр ниндәй шарттарҙа ғаиләһен, торлағын юғалта?**
а) алама ғәҙәттәр ҡоллоғона эләккәс;
б) эшендә уңышһыҙлыҡҡа осрағас;
в) иркенән мәхрүм ителгәс.

**2. Дилбәрҙең ғәфү итә белеү, үсләшмәү һыҙаты ҡайҙа, кем ярҙамында нығына?**
а) инвалид балалар йортонда;
б) төрмәлә;
в) мәсеттә.

**3. Повеста ҡатын-ҡыҙҙарҙың ниндәй күңел сифаты тураһында бәхәстәр айырыуса ҡыҙыу бара?**
а) көсө;
б) һығылмалылығы;
в) сабырлығы.

**4. Үҙенең асылына ҡайтыу өсөн Дилбәргә нимәләр аша үтергә тура килә?**
а) байлыҡ аша;
б) бәхетһеҙлек аша;
в) уңыш ҡаҙаныу аша;

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем беҙгә 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Гөлсирә Ғиззәтуллина-Ғәйсарова үҙенең автографы ҡуйылған "Йәннәт һулышы" китабын бүләк итмәксе. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Лира Яҡшыбаеваның автографы ҡуйылған "Зәйнулла ишан" китабын Архангел районы Родинка ауылынан Әминә Әхтәмова отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**Викторинаны
Иҙел РӘХИМОВ
алып бара.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

## ОҘАЙҒАН ҺАЙЫН...

### ҡыҫҡара ғүмер

- Ҡорал менән көсһөҙҙө ҡурҡытыу дан түгел, йыртҡыслыҡ ул.
- Юлды өҙәр өсөн һалмайҙар, улар мәңгелек, сиге юҡ.
- Ижад итеү - бала табыуға бәрәбәр.
- Ғүмер оҙайған һайын ҡыҫҡара: баҡыйлыҡ яҡыная.
- Ғүмер ҡыҫҡара, әммә йөрәккә ауыр йөгөн һала ла һала.
- Шатлыҡ түмен белмәгәнгә ҡыҫҡа ғүмер ҙә әрәм.
- Ҡыйыш ултыртҡан ағас барыбер ҡыйыш үҫә.
- Машинаға ҡыҙыҡма ла, һымһынма ла, бер көнде лә машинаға һалып ҡуммайҙар.
- Ят заттың ҡыйыш яҡтары тиҙерәк күренеүсән.
- Әсе телле әҙәм хәленән килмәһә лә әремен һибә генә.
- Ил ауыҙын тығырға илле ыштаның булһын: береһен ыңғайына һыпыр, ҡайһы берен һеңгәҙәткәнсе әйт, бәғзеһенә көлөп кенә ҡара.
- Ауылында ирәйгән ир - сит яҡтарҙа шым көсөк.
- Йәшлектәге ауырлыҡтар мәрәкәгә тиң.
- Харам ашаған ауыҙ дөрөҫ һөйләмәҫ.
- Уйға хужа булыуы ҡыйын - ер сигенә лә осора.
- Көллө әҙәм ожмахҡа инергә теләй, әммә берәүҙең дә үлгеһе килмәй.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АҠСА ЙЫЙЫУ...

### ул ярты аҡыллылыҡ билдәһе

Йомарт малын үҙе ашар, һаран малын эт ашар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тыуған илде бөйөк булған өсөн түгел, ә үҙеңдеке булған өсөн һөйәләр.

**(Сенека).**

Бай булырға түгел, аҡыллы булырға тырыш - байлыҡтан яҙырһың, аҡыл һәр саҡ үҙең менән ҡалыр.

**(Эзоп).**

Бай булыр өсөн тырышып аҡса йыйыу - ул ярты аҡыллылыҡ йәки түбән йәнлелек билдәһе ул.

**(С. Франк).**

Байрам итеү ғәҙәте менән бергә кешегә эс бошоу сифаты ла бирелгән.

**(Ж. Лабрюйер).**

Аҡһөйәктәр йәмғиәтендә кемдәрме? Йәрәкһеҙ ҡыҙ-ҡатындар һәм мейеһеҙ ирҙәр йыйылған унда һәм улар бер-береһенә тороҙлоҡ.

**(А. Детуш).**

Ғүмер оҙон, әгәр ул тулы булһа ғына. Шуға ла ғүмерҙе ваҡыт менән түгел, ҡылыҡтарың менән үлсә.

**(Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Был хәл Сөләймән бәйғәмбәр заманында була. Бер кеше тирләп-бешеп бәйғәмбәр һарайының ҡапҡа төбөнә килеп туҡтай. Уның ҡурҡыуҙан ағарынған йөҙөн күреп, бәйғәмбәр "Ни булды?" тип һорай. "Мин Ғазраилды күрҙем, - ти кеше. - Ул миңә шул тиклем асыуланып ҡараны". "Ә мин нимә эшләй алам?" тип һорай унан тағы ла Сөләймән бәйғәмбәр. "Ел менән әрҙәреп, мине Һиндостанға алып барып төшөр. Шулайтып, мин Ғазраилдан йәнемде ҡотҡарып ҡалайым..." Бәйғәмбәр уның үтенесен үтәй: елгә был кешене Һиндостандың үҙәгенә үк осороп алып барып ташларға бойора.**

**Икенсе көндө Сөләймән бәйғәмбәр Ғазраилды осрата һәм:" Һин ни өсөн ул кешегә асыуланып ҡараның, ул ҡурҡыуынан ғаиләһен һәм илен ҡалдырып, сит тарафтарға ҡасып китте", - ти. "Мин уға асыуланып ҡараманым, - ти Ғазраил. - Алла миңә: "Иртәгә һин Һиндостанға бар һәм ул кешенең йәнен ал!" , - тип бойорҙо. Ә ул кеше бында йөрөп ята. Ул иртәгә нисек итеп Һиндостанға барып етә алыр икән, тип аптырап ҡараным мин уға..."**

**Бына шулай, беҙ йыш ҡына үҙ-үҙебеҙҙән ҡасабыҙ. Алланан да ҡасып ҡотолорға теләйбеҙ. Был бит файҙаһыҙ. Яҙмыштан, Алла ҡушҡандан ҡасып булмай..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
3 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 418/03